**МИНИСТЕРСТВО ПРОСВЕЩЕНИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ**
**Министерство образования и науки Республики Башкортостан**
**МАОУ «СОШ № 9» городского округа г.Стерлитамак РБ**
**МАОУ СОШ №9**

# РАБОЧАЯ ПРОГРАММА

**«Государственный (башкирский) язык республики Башкортостан»**
для обучающихся 5-9 классов

**Стерлитамак 2024**

## АҢЛАТМАЛЫ ЯҘЫУ

Төп дөйөм белем биреү кимәленә «Башҡортостан Республикаһының Дәүләт (башҡорт) теле» уҡыу предметынан 5-9 кластар өсөн төп дөйөм белем биреү (артабан – Программа) түбәндәге норматив-хоҡуҡи документтарға нигеҙләнеп эшкәртелде:

- Конституция Российской Федерации;
- Рәсәй Федерацияһының Конституцияһы;
- Федеральный закон от 29 декабря 2012 г. № 273-ФЗ «Об образовании в Российской Федерации» (с изменениями и дополнениями);
- Рәсәй Федерацияһының конституцияһы;
- Федеральный закон от 29 декабря 2012 г. № 273-ФЗ «Об образовании в Российской Федерации» (с изменениями и дополнениями);
- «Рәсәй Федерацияһының мәғариф тураһындағы законы» (29.12.2012. №273-ФЗ) (үҙгәрештәр һәм өҫтәмәләр менән);
- «Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы (25.10.1991. № 1807-1 ФЗ) (үҙгәрештәр һәм өҫтәмәләр менән);
- «Төп дөйөм белем биреү Федераль дәүләт белем биреү стандарттары» (31. 05.2021 й. № 287);
- Төп дөйөм белем биреүҙең өлгө төп дөйөм белем биреү программаһы (18.03.2022. № 1/22дөйөм белем биреү буйынса федераль уҡыу-уҡытыу берекмәһе ҡарары менән раҫланған);
- Өлгө тәрбиәүи программа (02.06.2020. № 2/20 дөйөм белем биреү буйынса федераль уҡыу-уҡытыу берекмәһе ҡарары менән раҫланған);
- «Рәсәй Федерацияһы халыҡтарының туған телдәрен уҡытыу Концепцияһы» (2019 йылдың 1 октябрендә Рәсәй Федерацияһының Мәғариф Министрлығы коллегияһы ултырышында раҫланған);
- Башҡортостан Республикаһының конституцияһы;
- Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһындағы» Законы (үҙгәрештәр һәм өҫтәмәләр менән);
- 2021 – 2030 йылдарҙа «Башҡортостан Республикаһының дәүләт телдәрен һәм Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының туған телдәрен уҡытыу Концепцияһы» (30 декабрь Башҡортостан Республикаһы Башлығы 2020 йылда № УГ-613 Ҡарары менән раҫланған);
- 2021 – 2030 йылдарҙа «Башҡортостан Республикаһының дәүләт телдәрен һәм Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының туған телдәрен уҡытыу Концепцияһы» (30 декабрь Башҡортостан Республикаһы Башлығы 2020 йылда № УГ-613 Ҡарары менән раҫланған)

Программа нигеҙендә федераль дәүләт белем биреү стандарттарының методологияһын тәшкил иткән системалы-эшмәкәрлекле йүнәлеш ята. Өлгө тәрбиәүи Программалар формалаштырылған маҡсатлы өҫтөнлөккә йүнәлдерелгән Программа «Башҡортостан Республикаһының Дәүләт (башкорт) теле» уҡыу предметы буйынса эш программалары төҙөүгә йүнәлеш булып тора.

Программа башҡорт теле уҡытыусылары өсөн белем биреүҙә яңы тенденциялар һәм актив методикалар ҡулланыуға йүнәлдерелгән.

Программауҡытыусыға:

1) башҡорт теле уҡытыу процесында Федераль дәүләт белем биреү стандарттарында формалашҡан шәхсән, предмет, метапредмет һөҙөмтәләргә өлгәшеүҙең хәҙерге йүнәлештәрен тормошҡа ашырыу;;

2) «Башҡортостан Республикаһының Дәүләт (башкорт) теле» уҡыу

предметының планлаштырылған һөҙөмтәләрен һәм йөкмәткеһен федераль дәүләт белем биреү стандарттарына; төп дөйөм белем биреү өлгө төп дөйөм белем биреү программаһына; өлгө тәрбиә программаһына яраҡлы һәр уҡыу йылына билдәләү һәм структурлаштырыу;

3) билдәле бүлек/теманы өйрәнеүгә бүленгән яҡынса уҡыу сәғәттәрен, шулай уҡ бүлек/теманың уҡыу материалын үҙләштереүгә тәҡдим ителгән төп уҡыу эшмәкәрлеген ҡулланып, тәғәйен класс үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, календарь-тематик планлаштырыуҙы эшкәртеү.

Программа йөкмәткеһе Федераль дәүләт белем биреү стандарттарының «Туған тел һәм туған әҙәбиәт» предмет өлкәһендә бирелгән төп дөйөм белем биреүҙә төп дөйөм белем биреү программаһының талаптар өлөшөндәге өлгәшелгән һөҙөмтәләрҙе үҙләштереүҙе тәьмин итә.

Программа нигеҙендә федераль дәүләт стандарттарының методологияһын тәшкил иткән системалы-эшмәкәрлекле йүнәлеш ята.

## «БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫНЫҢ ДӘҮЛӘТ (БАШҠОРТ) ТЕЛЕ» УҠЫУ ПРЕДМЕТЫНА ДӨЙӨМ ХАРАКТЕРИСТИКА

Башҡортостан Республикаһының ҡануниәтенә һәм Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына яраҡлы «Туған тел һәм туған әҙәбиәт» предмет өлкәһендә «Башҡортостан Республикаһының Дәүләт (башҡорт) теле» уҡыу предметы Башҡортостан Республикаһы биләмендә дәүләт һәм муниципаль белем биреү ойошмаларында урынлашҡан Башҡортостан Республикаһының ҡануниәттәренә һәм Төп дөйөм белем биреү Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына ярашлы бәлиғ булмаған уҡыусыларҙы «Башҡортостан Республикаһының Дәүләт (башҡорт) теле» уҡыу предметына өйрәтеү ата-әсәләрҙең (законлы вәкәләтлеләр) ғаризалары нигеҙендә ойошторола.

«Башҡортостан Республикаһының Дәүләт (башҡорт) теле» уҡыу предметын өйрәнеү гуманитар циклындағы «Рус теле», «Әҙәбиәт» һәм башҡа уҡыу предметтары менән дисциплинар бәйләнеште булдырыуҙы иҫәпкә ала.

Башҡорт теле, үҙенең аралашыуҙа һәм фекерҙе сағылдырыуҙа төп функцияһын үтәп, шәхес ара һәм кешеләргә социаль үҙ-ара бәйләнеште тәьмин итә, аңды, үҙ аңыңды һәм шәхестең онъяға ҡарашын формалаштырыуҙа ҡатнаша, мәғлүмәтте, мәҙәни традицияларҙы, Башҡортостан Республикаһының башҡорт һәм башҡа халыҡтарҙың тарихын һаҡлау һәм тапшырыуҙың төп сараһы булып тора.

«Башҡортостан Республикаһының Дәүләт (башҡорт) теле» уҡыу предметын өйрәнеү гуманитар циклдағы “Рус теле”, “Әҙәбиәт” предметтары менән бәйләнеште күҙ уңында тота.

Башҡорт теле, үҙенең аралашыу һәм фекер сағылдырыуҙың төп функцияһын үтәү барышында, шәхес-ара һәм кешеләрҙең социаль үҙ-ара бәйләнештә булыуын тәьмин итә, аңды, үҙаңыңды һәм шәхестең донъяға ҡарашын формалаштырыуҙа ҡатнаша, мәғлүмәтте, мәҙәни традицияларҙы, Башҡортостан Республикаһындағы башҡорт һәм башҡа халыҡтарҙың традицияларын һаҡлау һәм тапшырыуҙа мөһим сара булып тора.

«Башҡортостан Республикаһының Дәүләт (башҡорт) теле» курсы уҡыусыларҙың әхлаҡи һәм коммуникатив мәҙәниәтен камиллаштырыуға, уның интеллектуаль һәм ижади һәләтен, аң, хәтер һәм фараз итеүен, үҙаллы уҡыу эшмәкәрлеген үҫтереүгә йүнәлдерелгән.

Башҡорт телен уҡытыу йөкмәткеһе кешенең уҡыу күнекмәләрен берләштергән киүек функциональ грамоталыҡты үҫтереүгә, тексты аңлау, төрлө форматтағы текстарҙа мәғлүмәтте ҡулланыу, үҙ маҡсатыңа өлгәшеү өсөн уны баһалау, үҙеңдең белем һәм мөмкинлектәреңде киңәйтеү, социаль тормошта ҡатнашыуға йүнәлдерелгән.

Уҡыу предметының йөкмәткеһе дәрестән тыш эшмәкәрлектә тормошҡа ашырыла ала: предмет аҙналары, экскурсиялар, тематик саралар, олимпиадалар, конкурстар, түңәрәктәр эше, театрға барыу, һуңынан анализ үткәреү менән фильмдар ҡарау һ.б.

## «БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫНЫҢ ДӘҮЛӘТ (БАШҠОРТ) ТЕЛЕ» УҠЫУ ПРЕДМЕТЫНЫҢ

## ӨЙРӘНЕҮ МАҠСАТ ҺӘМ БУРЫСТАРЫ

«Башҡортостан Республикаһының Дәүләт (башҡорт) теле» уҡыу предметының өйрәнеүҙең **маҡсаты** уҡыусыларҙа телмәр эшмәкәрлеген төп төрҙәрендә (аудирование, һөйләү, уҡыу, яҙыу) коммуникатив компетенцияны формалаштырыу.

«Башҡортостан Республикаһының Дәүләт (башҡорт) теле» уҡыу предметының өйрәнеүҙең **бурыстары:**

– телмәр тотҡарлығын һәм башҡорт телен аралашыу сараһы булараҡ ҡулланыуҙы үтеү өсөн уңайлы психологик климат булдырыу;

– яңы теманы үҙләштереү барышында уҡыусыларҙың шәхси сифаттарын, уларҙың ҡыҙыҙаллауын, иғтибарын, хәтерен үҫтереү;

– элементар лингвистик ҡыҙыҙаллауҙы үҙләштереүгә йүнәлдерелгән, уҡыусыларҙың элементар кимәлдә телдән һәм яҙма телмәрен үҙләштереү өсөн аңлайышлы һәм кәрәкле булған лингвистик ҡыҙыҙаллауҙы киңәйтеү.

## «БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫНЫҢ ДӘҮЛӘТ (БАШҠОРТ) ТЕЛЕ» УҠЫУ ПРЕДМЕТЫ ПРОГРАММАҺЫНЫҢ ТӨП ЙӨКМӘТКЕЛЕ ЙҮНӘЛЕШЕ

Программаның беренсе блогында – **«Мин һәм минең донъям» -** программаһы тәрбиәүи маҡсаттарға йүнәлдерелгән, иңң мөһиме, баланы тышҡы һәм үҙ донъяһы менән аңлашып йәшәүгә өйрәтеү. Блок күберәк телдән һәм яҙма телмәрҙе үҫтереүгә йүнәлдерелгән.

Икенсе блок **«Башкортостан –минең тыуған яғым»** – халыҡтар дуҫлығы менән бәйләнгән; Рәсәйҙең үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге, уның башҡа илдәр менән мөнәсәбәте; тыуған яҡтың тарихы һәм хәҙерге тормош, күренекле урындар, тарихи ерҙәр; мәҙәниәт, халыҡ байрамдары һәм йолалары; Республикала йәшәүсе башҡорт һәм башҡа халыҡтарҙың көнкүреше һәм тормош эшмәкәрлек үҙенсәлектәре. Материал толерантлыҡ, мәҙәниәт диалогы һәм бер-береңә ихтирам принциптары нигеҙендә шәхестең рәсәй граждандлыҡ йәмғиәтен төҙөү бөрыстарына яуап биреүсе шәхес сифаттарын тәрбиәләү һәм үҫтереүгә йүнәлдерелгән.

Өсөнсө блок **«Тыуған яҡтың тәбиғәте»** – Башҡортостан тәбиғәте, тыуған яҡтың үҫемлек һәм хайуандар донъяһының төрлөлөгө, климат үҙенсәлектәре һәм экологик проблемалар менән таныштыра. Был блок темаларҙа үҙләштереү һөҙөмтәһендә уҡыусыларҙа тәбиғәткә ҡарата һаҡсыл ҡараш формалаша һәм уларҙың аң-белем даирәһе киңәйә.

Тәҡдим ителгән Программа эш программа төҙөүселәргә йүнәлеш булып хеҙмәт итә. Эш программаһы авторҙары үҙаллы уҡыу материалының эҙмә-эҙлелеген, уның күләмен, эшмәкәрлек төрҙәрен билдәләй ала.

## «БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫНЫҢ ДӘҮЛӘТ (БАШҠОРТ) ТЕЛЕ» УҠЫУ ПРЕДМЕТЫНЫҢ УҠЫУ ПЛАНЫНДАҒЫ УРЫНЫ

Төп дөйөм белем биреү федераль дәүләт белем биреү стандарттарына яраҡлы «Туған тел» уҡыу предметы «Туған тел һәм туған әҙәбиәт» предмет өлкәһенә инә.

«Башҡортостан Республикаһының Дәүләт (башҡорт) теле» уҡыу предметын өйрәнеүгә 510 сәғәт бирелә: 5-се кластан 9-сы класҡа тиклем (аҙнаға 3 сәғәт) 102-әр сәғәт.

Белем биреү ойошмалары уҡыу предметын өйрәнеүгә бүленгән, белем биреү мөнәсәбәтендә ҡатнашыусылар формалаштырған план өлөшөндәге сәғәттәр иҫәбенән үҙаллы сәғәттәр һанын арттыра ала.

## «БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫНЫҢ ДӘҮЛӘТ (БАШҠОРТ) ТЕЛЕ» УҠЫУ ПРЕДМЕТЫНЫҢ ЙӨКМӘТКЕҺЕ

**5 КЛАСС**
**Тематик блоктар**
**Мин һәм минең донъям**

**Һаумы, мәктәп!**

*Һаумы, мәктәп!*

М. Кәрим «Уҡыусыға», Ғ.Рамазанов «Йәшә, тыуған ерем!».

Ф.Ғөбәйҙуллина«Рәйфә мәктәпкә бара»,

Е.Кучеров «Шүльгәнташ мәмерйәһе»,

*Минең мәктәбем*

А.Игебаев «Һау булығыҙ, аҡҡоштар!»,

Р. Солтангәрәев «Шағир», С. Алибаев. «Яҡшы»,

*Минең класташтарым*

Е.Кучеров «Уҡыусылар» (“Башҡортостан уҡытыусыһы” журналынан), Ғ.Ҡотоева «Белем көнө».

**Үҙем тураһында**

*Мин һәм минең ғаиләм*

Ф. Рәхимғолова «Матур менән көслө», В.Гудков «Көҙ көнө», Р.Искужина «Минең ҡустыларым», Ә.Хәбибуллина «Беҙҙең ғаилә»

*Үҙем тураһында*

“Башҡортостан флагы”,

Ф.Рәхимғолова “Беҙҙең әсәй”,

“Беҙҙең фатир” (“Йәншишмә” гәзитенән)

**Кеше. Тән ағзалары. Шәхси гигиена**

*Кеше. Тән ағзалары. Шәхси гигиена*

И.Ғүмәрова «Уңған ҡыҙ»,

А.Кандратова «Һөйләйбеҙ», Әкиәт «Аҡыллы турғай».

**Яңы йыл менән!**

*Яңы йыл*

Г.Юнысова “Ҡыш бабай”Ф.Иҫәнғолов «Алдаҡы йондоҙҙар», Ҡ.Даян «Шыршы», З.Биишева «Ауырыуҙан ҡотолдо»,

*Беҙҙең елка*

А. Исмәғилева «Яуа ҡарҙар...»,

М.Ғәли «Беҙҙең елка».

Е.Кучеров «Ғинуар».

«Карнавал» («Аманат» журналынан)

**Аҙыҡ-түлек. Кейем-һалым. Өй. Магазин**

*Аҙыҡ-түлек. Кейем-һалым.*

.Ғәлиева «Икмәк», Ф.Туғыҙбаева «Яңы күлдәк», А.Ягафарова “Бал”

*Магазин. Өй*

Г.Абдулхаева “Икмәк үткән юл”

Р.Шәкүр «Эшһөйәрҙәр иле».

Т.Ғәниева “Бишбармаҡ”,

А.Гиталов “Икмәк тураһында уйҙар”

**8 Март – Ҡатын ҡыҙҙар көнө!**

*Ҡатын-кыҙҙар көнө*

Ф.Мөхәмәтйәнова “Әсәләр”.

М.Пляцковский “Ел белһен...”, Ф.Туғыҙбаева «Тыуған көн», Ғ.Байбурин һүҙҙәре, Р.Сәлмәнов музыкаһы «Яратам мин илемде» (йыр)

*Минең әсәйем*

Ә.Ихсан «Әсә рәхмәте», З.Әхмәтйәнова «Нәби менән әбей», З.Ханнанова “Мин бәхетле...”,

Ф.Юлдашбаева “Минең өләсәйем”

**Башҡортостан – минең тыуған яғым**

**Тыуған Башҡортостаныңды беләһеңме?**

*Минең Башҡортостаным*

С.Әлибаев «Тыуған ерем», “Башҡортостан” (“Аҡбуҙат” журналынан), М.Пришвин «Тәбиғәтте һаҡлаясаҡбыҙ», Ф.Ғөбәйҙуллина «Башҡортостан флагы»

*Тәбиғәт менән бергә*

М.Ситдикова “Республика көнө”, Ф.Ғөбәйҙуллина “Республиканың дәүләт символдары”, С.Йәнтүриндән «Ҡурай», Р.Латыпова, Р.Камалова “Салауат Юлаев”, С.Юлаев «Уралым», “Ағиҙел йылғаһы” (“Киске Өфө” гәзитенән).

**Тыуған яҡтың тәбиғәте**

**Йыл миҙгелдәре**

*Йыл миҙгелдәре*

И.Бураҡаев, М. Бураҡаева, М.Юлмөхәмәтов «Беҙ тәбиғәт менән бергә», Х.Кәрим «Минең илемдә», Г.Скребицкийҙән «Көҙ - рәссам»,

К. Тәңреколов «Дүрт ҡыҙ»,

К.Ушинскийҙан «Дүрт теләк», Л.Шаһисолтанов «Көҙгө урманда», Ф.Рәхимғолова «Ҡайҙан белдең?», С.Муллабаев «Хикмәтле ҡар».

*Тәбиғәт күренештәре*

М. Дилмөхәмәтов «Яҙ», М. Дилмөхәмәтов «Сәскә менән күбәләк», Л. Толстой «Бабай һәм Һыу инәһе». Л.Шаһисолтанова “Көҙгө урманда”, С.Әлибаев “Матур көн”

**Яҙ етте**

*Яҙ*

Ә.Ихсан «Яҙ»,

С. Муллабаев «Олатай», В.Осеева «Әбей»,

Р.Ғарипов “Сыйырсыҡ”,

Ф.Ғөбәйҙуллина «Минең дуҫым компьютер»,

С. Муллабаев «Яҙ».

*Ҡоштар –беҙҙең дуҫтарыбыҙ*

Е. Кучеров «Ҡоштар ҡасан ҡайта?»,

Ф.Рәхимғолова «Еңеү көнө», В.Исхаҡов «Миҙал һәм малай», С. Богомазов «Беҙгә тыныслыҡ кәрәк», К.Ушинский «Баҡсасы һәм уның улдары», Н. Надеждина «Яҙҙың тәүге сәскәһе»,

А.Асадуллина “Өмәлә”.

**Йәйҙе ҡаршылайбыҙ**

*Һаумы, йәй!*

С.Әлибаев «Һаумы, йәй!», Ә.Чаныш. «Ҡоштоң ғүмере – йырында»,

“Ҡарға буҡтаһы”, “Һабантуй” (“Аҡбуҙат” журналынан”

*Тыуған ер!*

А.Игебаев «Тыуған ер».

Алмаштары,

“Лагерь иртәһе” (“Аманат” журналынан”)

*Уҡыусыларҙың белемдәрен тикшереү*

Уҡыусыларҙың белемдәрен тикшереү һәм үтелгәндәрҙе ҡабатлау (2 сәғәт)

**Грамматик материал**

**Фонетика. Орфоэпия и Графика**

Өн һәм хәреф. Алфавит (ҡабатлау)

Тартынҡы һәм һуҙынҡы өндәрҙең системаһы.

Һуҙынҡы өндәрҙең дөрөҫ әйтелеше (ҡабатлау)

Тартынҡы өндәрҙең дөрөҫ әйтелеше (ҡабатлау)

Ижек. Ижек төрҙәре (ҡабатлау)

**Морфемика һәм һүҙьяһалыш**

Тамыр һәм аффикс.Һүҙҙең тамыры. Тамырҙаш һүҙҙәр

**Лексикология и фразеология**

Фразеологизмдар,уларҙың мәғәнәһе. Ҡулланыу үҙенсәлектәре

Бер мәғәнәле һәм күп мәғәнәле һүҙҙәр. Һүҙҙәрҙең тематик төркөмө. Антонимдар. Синонимдар. Омонимдар

**Морфология**

**Исем (ҡабатлау).** Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше. Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр

Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше

**Сифат (ҡабатлау).** Дөйөм грамматик мәғәнәһе, морфологик үҙенсәлектәре һәм синтаксик функцияһы

**Ҡылым (ҡабатлау).** Дөйөм грамматик мәғәнәһе, морфологик үҙенсәлектәре һәм синтаксик функцияһы

**Алмаш (ҡабатлау).** Зат алмаштары. Эйәлек алмаштары. Күрһәтеү алмаштары. Һорау алмаштары. Билдәләү алмаштары. Билдәһеҙлек алмаштары. Юҡлыҡ алмаштары.

**Телмәр үҫтереү**

И.Бураҡаев һ.б. «Башҡа халыҡтар шәжәрә яҙғанмы?».

«Сыбар тауыҡ» (рус халыҡ әкиәте), “Ҡышҡы уйындар” (сюжетлы картина), В.Меос “З.Исмәғилевтың тыуған яҡтары. Сәрмән”, Р.Нурмөхәмәтов «Эштән һуң» (картина).

## 6 КЛАСС

**Тематик блоктар**

**Мин һәм минең донъям**

**Беҙҙең мәктәп**

*Беҙҙең класс һәм минең дуҫтарым*

Т.Ғәниева «Беренсе сентябрь», «Намыҫлы бул» («Көс һәм рух тамырҙары» китабынан),Ф.Фәткуллина «Ҡояш»,

“Сыйырсыҡ” (“Мәктәп календары”нан)

*Көҙ күренештәре*

С.Аксаков «Аҡҡош», Г.Яҡупова “Октябрь”, Р.Низамов “Көҙ картинаһы” К.Кинйәбулатова «Көҙҙәр еткәс» М.Горький «Китапты яратығыҙ!».

**Дуҫлыҡ ҡәҙерен бел!**

*Дуҫлыҡ*

Р. Бикбаев «Дуҫлыҡ ауыр саҡта һанала «, «Һеҙҙе ҡунаҡҡа саҡырҙылар... («Ҡыҙҙарға мең кәңәш» китабынан).

*Минең дуҫтарым*

Д. Фатихова «Кем дуҫ?», А.Йәғәфәрова «Дуҫлыҡ менән шаярмайҙар».

Р.Ураҡсина “Башҡортостан”.
Рәт һандары

**Башҡортостан – минең тыуған яғым**

**Башҡортостан ере буйлап**

*Минең Ватаным*

А. Филиппов «Ватан»,

Ф. Мөхәмәтйәнов «Кешем – ил күрке». Р. Бикбаев «Салават батыр һәйкәле»,

В. Дмитриев «Ҡайын».

*Минең Башкортостаным*

Ә. Әхмәтова «Ҡайындар ниңә аҡ», З.Ураҡсин «Яраҡлашыу», Г.Юнысова «Башкортостан –дуҫлыҡ иле», М. Карим «Ватаным «.

*Үҙ тыуған яғығыҙҙы яратығыҙ!*

С. Юлаев «Тыуған илем», Г. Молодцов «Башкирия»,

Ф. Туғыҙбаева «Кем уңған?», М. Карим «Дим буйы», В. Сухомлинский «Сөнки мин - кеше», Ғ.Хөсәинов. «Оло яҙыусы һәм ғалим», Ә. Әсәдуллина «Хушлашыу».

**Тыуған яҡтың тәбиғәте**

**Ҡыш дауам итә**

*Ап-аҡ ҡыш*

Ф.Мәҡсүтова «Ҡар бөртөктәре», И.Ф. Зиянчковскийҙан «Ҡышҡы тәбиғәт», «Ҡоштар донъяһы» («Башҡортостан» газетаһынан), Г.Яҡупова «Уртаҡ ҡыш»,

*Ҡар яуа*

К.Шафиҡова «Ҡар яуа», Х. Ғиляжев «Оса күктә», Т.Сәғитов «Икмәк»,

Ә. Бикташев «Хыял»,

К. Чарушин «Ҡыш етте», И. Киньябулатов «Хәйерле иртә, донъя!»,

К. Киньябулатова «Аҡ нур булып балҡыны». Н. Наджми «Ҡыш»,

**Яҙ килә, яҙ!**

*Яраткан миҙгелем*

Р.Янбулатова «Ҡоштар ҡайта», Ҡ.Кулиев «Бөтә тереклекте һаҡлағыҙ», Г.Юнысова «Тәбиғәтте шулай яраталармы?», Р.Ҡужина-Латыпова «Күҙҙәреңдә әсәй – донъя…», К.Кинйәбулатова «Ҡарғалар йыры»

*Халыҡ йолалары*

Р. Солтангәрәева «Ҡарға бутҡаһы», З.Биишева «Баҡсала», Ф.Рәхимғолова «Апрель йылмая», Я. Колас «Яҙ тураһында йыр»,

Ә. Саяпова «Еңеү көнө», С. Әлибаев «Беҙ һанайбыҙ һандарҙы»,

Н. Виноградованан «Урманда йөрөү ҡағиҙәләре»

**Йәмле йәй килә**

*Йәйҙе яратам!*

Г.Фәйзи «Йәйҙе яратам», С.Хәжиев “Июнь”, Р.Әхмәҙиев «Июнь һәм май», Ш.Янбаев «Һабантуй», Р.Ғабдрахманов. «Ил төкөрһә, күл була», Р.Ғамзатов «Әсә йыры»,», М.Сиражи, «Йәй», В.Ғөмәров “Тәбиғәт шифаханалары”.

*Йәмле йәй*

Г.Яҡупова “Июль”, Р.Ғабдрахманов “Ил төкөрһә, күл була”, “Сәскәләрҙән сәскәләргә ҡунып..." ("Мәктәп календары"нан), "Балан" ("Йәшлек" гәзитенән), А.Ферсман "Күҙәтергә өйрән", С.Йәһүҙин "Курай”, С.Әлибай “Сал Урал”Й.Солтанов “Тыуған еркәйем”.

*Уҡыусыларҙың белемдәрен тикшереү һәм үтелгәндәрҙе ҡабатлау*

Үтелгән материалдарҙы ҡабатлау, контроль эш яҙҙырыу, алынған белемдәрен коррекциялау буйынса эштәр башҡарыу.

**Грамматик материал**

**Морфология**

**Һан.** Ябай һәм ҡушма һандар. Һан төркөмсәләре: төп һандар, рәт һандары, йыйыу һандары, бүлем һәм сама һандары, кәсер һандары.

**Рәүеш.** Рәүештәрҙең дөйөм грамматик билдәләре. Рәүеш төркөмсәләре. Төп рәүеш. Сәбәп-маҡсат рәүеше. Ваҡыт рәүеше. Урын рәүеше. Күләм-дәрәжә рәүештәре. Сағыштырыу рәүештәре. Сәбәп-маҡсат рәүештәре. Рәүештәрҙең сағыштырыу һәм артыҡлыҡ дәрәжәләре.

**Телмәр үҫтереү**

О.Багаевская "Ҡунаҡтар (Тыуған көн") (картина), В.Меос "Тауҙарҙа томан. Белорет районы" (картина), И.И.Шишикин «Ҡарағай урманындағы иртә» (картина), Б.Домашников. «Май. Ҡайынлыҡ» (картина), А.Тюлькин "Өфө ҡалаһындағы Шихандар"(картина).

## 7 КЛАСС

**Тематик блоктар**
**Мин һәм минең донъям**

**Мәктәп – белем шишмәһе**

*Минең мәктәп*

М.Карим «Уҡытыусыма»,

З.Биишева «Мәктәпкә тәү барған көн», Т.Дәүләтбирҙина «Миҙгелдәр»,

*Мәктәп йылдары*

К.Паустовский "Әсә теле", Ә.Әсәдуллина "Хушлашыу", К.Ушинскийҙан "Көҙгө көн", Г.Пикунова "Музейҙар"

**Ауыл тормошо**

«Алтын башаҡтар» (башҡорт халыҡ әкиәте), «Көҙ уртаһы» («Мәктәп календарынан»).

Ғ. Муртазин «Кем дөрөҫ?».

**Спорт. Спорт кәрәк-яраҡтары**

*Мин спорт яратам*

«Беҙҙең ғаилә - ярышта» («Мәктәп календарынан»), И.Мифтахова "Һаулығығыҙҙы һаҡлағыҙ", "Спорт түңәрәктәре" («Мәктәп календары»нан).

*Спорт*

Н. Идельбай «Беҙҙең катокта». Ф.Маҡсютов «Осоусы», Р. Әйүпов «Милли уйындар», «Башҡортостан ҡалаларында спорт» («Мәктәп календары»нан).

**Мин һәм беҙҙең ғаилә**

*Мин һәм минең ғаиләм*

К. Шафиҡова Әсәй күҙҙәре", "Әсә һүҙе" ("Башҡорт халыҡ ижады"нан), "Ҡошҡа әйләнгән әбей» (Башҡорт халыҡ әкиәте), Н. Сәлимов "Оҡшаштар", Ҡ.Даян "Атай кәңәше", С. Әлибаев "Матур көн", "Етегән йондоҙ" (легенда), З.Воскресенская "Әсә!", Ф. Рәхимғолова "Беҙҙең әсәй", Ш.Биҡҡол "Атай менән өләсәй", Й.Солтанов "Кәнәфер сәскәһе".

**Борон борон заманда...**

*Башҡорт халыҡ ижады*

«Ҡан ҡәрҙәш» (Башҡорт халыҡ әкиәте), А.Таһирова «Зәңгәр тауҙар илендә», Г.Цепулин "ҡыйыулыҡ, батырлыҡ...", Ф. Туғыҙбаева. «Тайыштабан ниңә өйөнән сыҡмай?».

**Берҙәмлек, дуҫлыҡ, тыныслыҡ**

*Берҙәмлек, дуҫлыҡ, тыныслыҡ*

Ш.Биҡкол “Тыныслыҡ кәрәк”, В. Баймырҙина “Дуҫлыҡ”, К.Кинйәбулатова “Дуҫтарым күп”, Г. Юнысова “Умырзая”.

*Минең дуҫтарым*

Р. Мөхәммәтов “Тауышһыҙ Талип”, С. Әлибаев “Дуҫтарым”, С.Әлибаев “Ҡайын һыуы”, М. Ғафури “Болон”, Н.Мусин “Урман – байлыҡ”, А. Гессен буйынса “Пушкин һәм китаптар».

**Башҡортостан – минең тыуған яғым**

**Башҡортостан буйлап сәйәхәт**

*Башҡортостан –тыуған яғым*

М.Кәрим “Башҡортостан”, Башҡорт халыҡ йыры “Урал”, Р.Ғарипов «Урал йөрәге», Х. Назар «Урала имәне», Б.Рафиҡов “Беҙҙең Ватан”

*Башҡортостандың күренекле урындары*

«Арҡаим» («Йәншишмә» газетаһынан), Й.Солтанов «Уралым».

**Тыуған яҡтың тәбиғәте**

**Көҙ-хеҙмәт һәм байлыҡ миҙгеле**

*Алтын көҙ*

Д.Булгакова «Илһам донъяһы», «Алтын башаҡтар» (башҡорт халыҡ әкиәте), «Көҙ уртаһы» (из «Мәктәп календарынан»), М. Белахова «Икмәк»,

Д.Булгакова “Илһам донъяһы”.

*Көҙгө эштәр*

Т.Йосопов «Икмәк еҫе», А.Игебаев «Тыуған ерем», Н.Мусин «Тәбиғәтте һаҡлағыҙ!», «Бал ҡорто» («Башҡортостан» гәзитенән), Ғ. Муртазин «Кем дөрөҫ?».

**Йәмле йәй**

З. Ҡотлогилдина «Йәй», Б. Баимов «Ямғыр яуа», Н. Кутдусов «Ҡырмыҫҡалар», С.А. Лавочкин «Самое важное», Б. Бикбай «Лагерь иртәһе».

*Уҡыусыларҙың белемдәрен тикшереү һәм үтелгәндәрҙе ҡабатлау*

Үтелгән материалдарҙы ҡабатлау, контроль эш яҙҙырыу, алынған белемдәрен коррекциялау буйынса эштәр башҡарыу.

**Грамматик материал**

**Морфология**

**Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре.** Ярҙамсы һүҙ төркөмдәренә дөйөм характеристика. Үҙаллы һүҙ төркөмдәренән ярҙамсы һүҙ төркөмдәренең айырмалығы. Ярҙамсы һүҙ төркөмдәренең дөрөҫ яҙылышы. Ярҙамсы һүҙ төркөмдәренең функциялары. Ярҙамсы һүҙ төркөмдәренең дөрөҫ яҙылышы.

**Бәйләүес.** Бәйләүестәрҙең грамматик функциялары. Теркәүестәрҙең бүленеше. Бәйләүестәрҙең дөрөҫ яҙылышы

**Теркәүес.** Теркәүес тураһында төшөнсә. Һөйләмдең тиң киҫәктәре һәм ҡушма һөйләмдең өлөштәре араһында бәйләнеү сараһы булараҡ теркәүес. Теркәүестәрҙе һөйләмдәрҙе һәм текст өлөштәрен бер-береһенә бәйләү сараһы булараҡ ҡулланыу. Теркәүестәрҙең дөрөҫ яҙылышы.

**Киҫәксә.** Киҫәксәләрҙең бүленеше. Киҫәксәләрҙең дөрөҫ яҙылышы.

Киҫәксәләр менән һөйләмдәрҙә интонация үҙенсәлектәре. Киҫәксәләрҙең дөрөҫ яҙылышы.

**Мөнәсәбәт һүҙҙәр.** Мөнәсәбәт һүҙҙәрҙең телмәрҙә ҡулланыу роле

**Ымлыҡтар.** Ымлыҡтартар тураһында төшөнсә. Уларҙың һөйләмдәге роле. Ымлыҡтарҙың дөрөҫ яҙылышы. Ымлыҡтарҙы интонацион һәм пунктуацион билдәләү.

**Оҡшатыу һүҙҙәре**. Оҡшатыу һүҙҙәрен, экспрессияны сағылдырыу сараһы булараҡ, һөйләү телмәрендә, матур әҙәбиәт телендә ҡулланыу выражения экспрессии. Оҡшатыу

һүҙҙәрен интонацион һәм пунктуацион айырыу

**Телмәр үҫтереү**

Т.Яблонская «Иртә» (картина), В.Меос “Ярҙамсы” (картина), Ф. Исмәғилев “Йылға буйында” (картина), Ә.Арыҫланов «Л.Н.Толстой Башҡортостанда» (картина).

## 8 КЛАСС

**Тематик блоктар**
**Мин һәм минең донъям**

**Хеҙмәте барҙың – хөрмәте бар**

*Хеҙмәте барҙың – хөрмәте бар*

К.Кинйәбулатова “Ватаным тауыштары”, З.Биишева “Йәшәү – бәхет”,

Л. Подкорытова, «Иғтибарлы бул!» Ю.Яковлев «Хеҙмәт»

*Хеҙмәт – йәшәү нигеҙе*

М.Ғафури «Гөлдәр баҡсаһында», А.Чанышева «Именлектәр теләйем!», Джон Маркс Темплтон «Тормошҡа ашмаҫтай эш юҡ»,

М.Шаган «Сит телде өйрәнеүселәргә кәңәштәр», Т. Мөхәмәтҡолов «Ҡыйыулыҡ».

**Беҙ йондоҙҙар булып ҡайтырбыҙ**

*Сәскәле ай*

С.Әлибаев “Сәскәле ай”, “Һалдат тора киләсәкте тотоп” (“Йәншишмә” гәзитенән), С.Ғәбиҙуллин “Ҡотлайым мин”, М. Харис “Хат.

*Беҙ йондоҙҙар булып ҡайтырбыҙ*

“Салауат Юлаев” (“Башҡорт поэзияһы антологияһы”нан), “Палдискиҙә музей” (“Аманат” журналынан), “Салауат Юлаевҡа һәйкәл” (“Башҡорт энциклопедияһы”нан)

**Башҡортостан – минең тыуған яғым**

**Өфө – Башҡортостандың баш ҡалаһы**

*Өфө – Башҡортостандың баш ҡалаһы*

И.Гвоздикова “Ҡалаларҙың үҙ биографияһы була”, Н.Нәжми “Тыуған ҡалама йыр”, М. Бураҡаева, И. Бураҡаев, М. Юлмөхәмәтов “Боронғо Өфө” (“Тормош һабаҡтары” дәреслегенән

*Өфө, мин һине яратам!*

Т.Ғарипов «Өфө» ҡалаһы атамаһының килеп сығышы», К.Даян «Ҡыҙыл ҡала», «Өфө урамдары « («Аманат» журналынан), Ә. Шаммасов «Сәләмләү».

*Башкортостан – минең тыуған ерем*

Т.Нечаева “Скульпторҙың бөйөк эше”, , “Ҡарға буҡтаһы” (“Йәншишмә” гәзитенән), Н.Сладков “Сел менән тепрпе”, Ә.Таһирова “Ерҙе һаҡлайыҡ”, Ф. Исәнғолов “Йәй көнө”,

**Ай Уралым, Уралым…**

*Минең тыуған яғым*

А.Игебаев “Башҡортостан – илгенәм”, Э.Фенинанан “Минең тыуған яғым, Н.Нәжми “башҡортостан”, Ә.Таһирова “Ерҙе һаҡлағыҙ!”, В.Исхаков “Талпан”, М.Карим “Ватан тураһында уйланыу” Р.Ниғмәтуллин “Башҡортостан”, Р.Йәнбәков “Мәңге балҡы, Башҡортостан”.

**Тыуған яҡтың тәбиғәте**

**Алтын көҙ етте**

*Алтын көҙ*

М.Сиражи “Йәндәрҙе балҡытыусы”, “Көҙ айҙары” (“Башҡортостан календары”нан), М.Ҡотлоғәләмов “Тәбиғәт ҡомарткылары”, “Торналар осоп киттеләр” (“Киске Өфө” гәзитенән)С. Муллабаев «Көҙгә урман».

*Көҙгө урман*

С. Муллабаев «Көҙгө тәбиғәт» "Тәбиғәт ҡосағында" ("Ағиҙел" журналынан), Р.Шаммасов "Тыуған яғым", К. Бальмонт "Көҙ". (Д.Юлтый тәржемәһе),

**Ап-аҡ ҡыш етте**

*Ҡыш айҙары*

С.Хажиев "Ноябрь", Ә.Вәхитова "Ҡарҙар яуа", Д.Лихачев «Тормош», Н.Нәжми "Ҡыш", Б.Магадиев "Өс һыҙат", Б.Головин "Аралашыу".

Ҡышҡы урман

С.Әлибаев "Ҡышҡы урман", В.Сухомлинскиҙән "Буран", Е.Кучеров "Бураны ла, тамсыһы ла булыр"., "ҡышлаусы ҡоштар" (7-се кластың "Биология" дәреслегенән). Ябай һөйләм. Һөйләмдең баш киҫәктәре. Эйә менән хәбәр

**Йәмле яҙ, һағындыҡ һине!**

*Яҙ етте*

Г.Яҡупова "Өмөтлө яҙ, һағындыҡ һине!", , И.Насыри "Яҙ килә",

З.Валитов "Март башы", Е.Кучеров "Яҙғы һыуҙар".

*Еңеү көнө*

К. Кинйәбулатова «Йырлай-илай еңеү яуланыҡ», «Тәүге космановт» («Башкортостан» газетынан), Р. Ниғмәти «Ватан», В. Сухомлинскиҙән "Геройҙар ҡәбере".

*Укыусыларҙың белемдәрен тикшереү һәм үтелгәндәрҙе ҡабатлау*

Үтелгән материалдарҙы ҡабатлау, контроль эш яҙҙырыу, алынған белемдәрен коррекциялау буйынса эштәр башҡарыу.

**Грамматик материал**

**Синтаксис.** Һүҙбәйләнеш һәм һөйләм

**Һүҙбәйләнеш.** Һүҙбәйләнеш төрҙәре. Теҙмә бәйләнеш. Пунктуация. Тыныш билдәлренең функцияһы. Эйәртеүле бәйләнеш төрҙәре. Теҙмә һәм эйәртеүле бәйләнеш.

**Һөйләм.** Һөйләм. Әйтелеү маҡсаты буйынса һөйләм төрҙәре. Һөйләм төрҙәре. Ябай һәм ҡушма һөйләмдәр. Тулы һәм кәм һөйләмдәр. Ябай һөйләм. Һөйләмдең баш киҫәктәре. Эйә менән хәбәр.

**Пунктуация.** Эйә менән хәбәр араһында һыҙыҡ.

**Телмәр үҫтереү**

А.А. Кузнецов "Салауаттан һорау алыу" (картина). Р. Нурмөхәмәтов «Агиҙел. Төш мәле» (картина). В.Меос "Шығайҙағы ҡайындар" (картина). В.Э.Меос "Ауылда ҡыш" (картина)

## 9 КЛАСС

**Мин һәм минең донъям**

**Һаумы,мәктәп!**

*Мәктәп йылдары*

А.Игебаев "Тоғро дуҫым, йор юлдашым!", М.Горький "Китапты яратығыҙ", М.Кәрим "Мәктәпкә барыу…" ("Оҙон-оҙаҡ" повесынан өҙөк), А.Ферсмандан "Ваҡыттан ҡәҙерлерәк нәмә юҡ", Ғ.Хөсәйенов "Бәхет нимә?"

"Күбәләктәр оса" ("Аманат" журналынан), М.Аҡмулла "Көҙ"

*Алтын көҙ етте*

Ғ.Хөсәйенов "Бәхет нимә?", К.Ушинскиҙән "Көҙгө көн", Э. Ишберҙин "Аҡҡош", "Аҫылташтар иле", Тиң һәм тиң булмаған аныҡлаусылар

**Халыҡ ижады – халыҡ хазинаһы**

*Минең шәжәрәм*

Ә. Сөләймәнов «Халыҡ ижады», „Торнаның күҙ йәше“ („Киске Өфө“ гәзитенән), Ш.Шәкүрова, Ә.Сөләймәнов „“Урал батыр“ эпосы, С. Галин «Шәжәрә», А.Шамаев “Башҡортҡымыҙы”, Р.Янгужин “Шәжәрә”.

*Башкорт халык ижады*

Д. Магадеев «Ырыу бүләге», «Йәмле Ағиҙел буйҙары» (халыҡ йыры), С.Агиш «Ҡунаҡ ашы», М.Юхма «Аҡҡоштар юлы», Л.Арыҫланова “Өс әхирәт”.

**Менгән атым-уң ҡанатым**

*Менгән атым-уң ҡанатым*

Н.Иҙелбай “Ел, ерәнем”, “Башҡорт аты” (“Һаҡмар” гәзитенән), А.Куприндан “Аттар”, Н.Иҙелбай “Ел, ерәнем”, В.Архангельский “Йылғалар…”, А.Куприн “Аттар”, Ә.Әминев “Турат”, С. Агиштан “Турыҡай”, Х.Юлдашев “Ҡара юрға”.

**Башҡортостан – минең тыуған яғым**

**Башкортостан мәҙәниәте**

*Башҡортостан театрҙары*

Ф. Фаткуллин «Өфө театрҙары», Г. Галина опера «Салауат Юлаев», «Музейҙар» («Мәктәп календарынан»), А. Абушахманов «А. Мөбәрәков», по Н. Гродзенский «Музыканы нисек тыңларға өйрәнергә», Ф. Латипова «Балҡы, «Нур!», И. Кинйәбулатов «Фәйзи Ғәсҡәров», Г. Галина «Әмин Зөбаиров», «Х.Кудашев» («Башкортостан» газетаһынан).

**Тыуған яктың тәбиғәте**

**Башҡортостан тәбиғәте**

*Тыуған як тәбиғәте*

Ғ.Хөсәйенов «Тыуған төйәк» Р.Бикбаев «Уралыма», Н. Мусин «Тормош йәме», Т.Ғәниева «Оло ялан» (рус һәм башҡорт телендә), Р.Ғарипов “Кеше”.

*Тыуған ер*

Р. Әҙһәмова «Тыуған илкәйем-ғәзиз еркәйем», Д. Буляков «Тыуған яҡ », Ф. Мөхәмәтйәнов «Кеше –ил күрке», «Еребеҙҙең йәшел бүләге » (из журнала «Аманат», М. Багаев «Башкортостан», М.Багаев “Башҡортостан!, Р.Шәкүр “Тыуған йорт”

**Беҙ ҡышты ла яратабыҙ**

*Ап-аҡ ҡыш*

Р.Ғарипов “Тәүге ҡар”, Н.Исламғолова “Ҡышҡы биҙәктәр”, Ш.Бабич “Кем өсөн?”, “Ҡышҡы юл”

*Ҡышҡы урман*

Н. Мусин «Уралда һалҡын ҡыш», “Ҡышҡы көндә” («Аманат» журналынан), В.Костров “Һаумы”, Р.Әхмәҙиев “Һалдаттар”, “Һыуыҡ тейеү” (“Мәктәп календары”нан), Р.Шәкүр “Яңы йыл”, С. Әлибаев “Ҡышҡы урман”.

**Яҙ килә**

*Яҙ бүләге*

А.Игебаев “Яҙ бүләге”, Л.Фархшатова”Тал бөрөһө”, Ғ.Дәүләтов “Яҙғы донъя”, Б.Ишемғол “Яҙ”

*Яҙғы тәбиғәт*

Р. Ишморатова «Март», Г.Юнысова “Әсәйҙәр бит яҙҙар кеүек”, Ғ.Рамазанов “Әсә йыры”, “Апрель” (“Мәктәп календары”нан), А.Игебаев “Ағастарҙы япраҡ биҙәй”, З.Ҡотлогилдина “Билдәһеҙ һалдат ҡәбере”, А.Мағазов “Ихтыярҙы тәрбиәләргә кәрәк”, “Аҡ ҡайын” (“Йәншишмә” гәзитенән

**Йәйге матурлыҡ**

*Йәй етте*

Р. Ғарипов «Бала булып булмай, тик бала саҡ...», Т. Йосопов «Ҡыңғырау тауышы», Г.Хөсәйенов « Ғәзиздәрҙән-ғәзиз тупраҡ».

*Йәйҙе яратам*

Ғ.Фәйзи «Йәйҙе яратам”, “Йәй” (“Мәктәп календары”нан), Ф.Фаткуллина “Ҡояш”, Д.Мырҙаҡаева “Йәйҙең хушлашыу айы”, А.Баһуманов “Йәй уртаһы”,

Т.Васильев “Һабантуй”, Ғ.Хөсәйенов “Ер-беҙҙең байлығыбыҙ”, А.Баһуманов “Йәй уртаһы”.

**Грамматик материал**

**Синтаксис.**

**Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре**. Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре һәм уларҙың төрҙәре.

**Аныҡлаусы**. Тиң һәм тиң булмаған аныҡлаусылар

**Өҫтәлмәлек.** Аныҡлаусының бер төрө.

**Тултырыусы.** Һөйләмдең эйәрсән киҫәге.

**Хәлдәр.** Хәл төрҙәре (рәүеш, күләм-дәрәжә, ваҡыт, урын, шарт, сәбәп, маҡсат, кире хәлдәр)

**Ябай һөйләм**. Ябай һөйләм төрҙәре. Ике составлы һәм бер составлы һөйләмдәр. Бер составлы һәм ике составлы һөйләмдәр. Бер составлы һөйләмдәр. Уларҙың грамматик билдәләре.

**Бер составлы һөйләм төрҙәре.** Бер составлы һөйләмдәрҙең ике составлы һөйләмдәрҙән грамматик айырмалыҡтары. Бер составлы һөйләм төрҙәре: билдәле эйәле һөйләм, билдәһеҙ эйәле һөйләм, эйәһеҙ һөйләм, атама һөйләм

Тулы һәм кәм һөйләмдәр.

**Тиң киҫәкле һөйләмдәр.** Тиң киҫәкле һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре.

Тиң киҫәкле һөйләмдәр эргәһендә дөйөмләштереүсе һүҙҙәр.

**Ҡушма һөйләм**. Ҡушма һөйләмдең мәғәнәүи, структур, интонацион берҙәмлеге.

**Пунктуация.** Ҡушма һөйләмдәр араһында тыныш билдәләре. Тиң киҫәкле һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре.

**Телмәр үҫтереү**

В.Меос “Ҡоштар китә” (картина), Р.Нурмөхәмәтов “Чехов Башҡортостанда”, Ф.Кащеев “Башҡорт ҡымыҙы”, У.Мөхәмәтшин “Ғаилә. Һабантуй”.

## ТӨП ДӨЙӨМ БЕЛЕМ БИРЕҮ КИМӘЛЕНДӘ «БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫНЫҢ ДӘҮЛӘТ (БАШҠОРТ ТЕЛЕ)» УҠЫУ ПРЕДМЕТЫН ҮҘЛӘШТЕРЕҮҘЕҢ ПЛАНЛАШТЫРҒАН ҺӨҘӨМТӘЛӘРЕ

### ШӘХСИ ҺӨҘӨМТӘЛӘР

«Башҡортостан Республикаһының Дәүләт (башҡорт) теле»нән төп дөйөм белем биреү өсөн өлгө программаның шәхси һөҙөмтәләре уҡыусыларҙың позитив йүнәлеш ҡиммәттәр системаһына нигеҙләнеүгә әҙер булыуын күрһәтергә тейеш һәм уның нигеҙендә эшмәкәрлек тәжрибәһен киңәйтеү һәм тәрбиәүи эшмәкәрлектең төп йүнәлеш процесын тормошҡа ашырыу, шул иҫәптән түбәндәге бүлектәрҙә:

***граждандлыҡ тәрбиәлә:***

граждандлыҡ бурыстарын үтәргә әҙер булыуы һәм уның хоҡуктарын тормошҡа ашырыу, хоҡуктарын, иркен һәм башҡа кешеләрҙең хоҡуҡи ҡыҙыҡһыныуҙарын хөрмәт итеү;

ғаилә, белем биреү ойошма, урындағы берҙәмлек, тыуған яҡ, ил тормошонда актив ҡатнашыу, шул иҫәптән башҡорт телендә яҙылған әҙәби әҫәрҙәрҙә сағылдырылған ситуациялар менән сағыштырмаса;

кеше тормошонда төрлө социаль институттарҙың ролен аңлау; төп хоҡуҡтар, иреклек һәм гражданиндың бурыстар, социаль нормалар һәм полимәҙәни һәм күп конфессиональ йәмғиәттәге ҡағиҙәләр тураһында күҙҙаллау, шул иҫәптән башҡорт телендә яҙылған әҙәби әҫәрҙәр миҫалы нигеҙендә формалашылғандарына;

төрлө берҙәм эшмәкәрлеккә әҙер булыу, бер-береңде аңлау һәм бер-береңә ярҙам итеүгә ынтылыу;

мәктәп үҙидаралыҡта актив ҡатнашыу; гуманитар эшмәкәрлектә (ярҙамға мохтаж кешеләргә ярҙам итеү; волонтерлыҡ) ҡатнашыуға әҙер булыу.

***патриотик тәрбиәлә:***

полимәҙәни һәм күп конфессиональ йәмғиәттә Рәсәй гражданлыҡ берҙәйлекте белеү, Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булараҡ башҡорт теленең ролен аңлау;

башҡорт телен үҙләштереүгә, Рәсәй Федерацияһының тарих һәм мәҙәниәтенә, үҙ яғыңдың мәҙәниәтенә, Рәсәйҙә йәшәүсе халыҡтарға ҡарата ихтирам һәм ҡыҙыҡһыныу күрһәтеү;

башҡорт теленә, үҙ республикаңдың уңыштарына, Ватан – Рәсәй, фәнгә, мәҙәниәткә, яу батырлыҡтарына һәм халыҡтың хеҙмәт уңыштарына ҡарата мөһим мөнәсәбәт;

Рәсәй символдарына, дәүләт байрамдарына, тәбиғәт һәм тарихи мираҫҡа һәм һәйкәлдәргә, тыуған яҡта йәшәгән төрлө халыҡтың традицияларына ихтирам;

***рухи-әхлаҡи тәрбиәлә;***

әхлаҡи ҡиммәттәргә һәм рухи һайлау ситуацияларындағы нормаларға ориентирлашыу;

үҙ тәртибеңде, шул иҫәптән телмәр һәм эш-ҡылыҡтарыңды, шул иҫәптән рухи һәм хоҡуҡи нормалар позицияһынан башҡа кешеләрҙең ҡылыҡтарын һәм тәртибен баһалауға әҙер булыу;

социаль ҡаршылыҡлы ҡылыҡтарҙы ҡабул итмәү; шәхси һәм йәмғиәт киңлектәр шарттарында шәхестең иреклеге һәм яуаплылығы;

***эстетик тәрбиәлә:***

сәнғәттең төрлө төрҙәрен, традициялар һәм үҙеңдең һәм башҡа халыҡтарҙың ижадын ҡабул итеү;

сәнғәткә эмоциональ тәьҫир итеүҙе аңлау; аралашыу һәм үҙеңде күрһәтеү сараһы булараҡ әҙәби мәҙәнилектең мөһимлеген аңлау; аралашыу һәм үҙеңде күрһәтеү сараһы булараҡ башҡорт теленең мөһимлеген аңлау;

***физик тәрбиә, һаулыҡ мәҙәниәтен формалаштырыу һәм эмоциональ именлектә:***

үҙ тормош һәм укыу тәжрибәһенә таянып, йәшәү ҡиммәттәрен аңлау; үҙеңдең һаулығыңа һәм сәләмәт тормош алып барыуға (сәләмәт аҙыҡ, гигиеник ҡағиҙәләрҙе һаҡлау, эш һәм ял режимын тигеҙләү, физик активлыҡ) күрһәтмә һәм яуаплы мөнәсәбәт; насар ҡылыҡтарҙың (спиртлы эсемлектәр, наркотиктар ҡулланыу, тартыу) физик һәм психик һаулыҡка зыян килтереүсе башҡа формаларҙың һөҙөмтәләрен аңлау; хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен, шулай уҡ мәктәптә тел буйынса белем биреү процесында интернет-мөхитендә хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре күнекмәләрен һаҡлау;

стресс ситуацияларға һәм социаль, үҙгәреүсе мәғлүмәти һәм тәбиғәт шарттарына, шул иҫәптән үҙ тәжрибәңде аңлап һәм артабанғы маҡсатыңды тормошҡа ашырыуға яраҡлашыу һәләтлеге;

тәнҡитләмәй үҙеңде һәм башҡаларҙы ҡабул итеү;

үҙеңдең эмоциональ хәл торошоңдо һәм башҡаларҙың эмоциональ хәл торошон тоя белеү, шул иҫәптән башҡорт телендә яҙылған әҙәби әҫәрҙәр миҫалына нигеҙләнеп, үҙеңдең хәл торошоңдо сағылдырыу өсөн тап килгән тел сараларын ҡулланыу;

рефлексия күнекмәләренең формалашыуы, хаталаныуға үҙ хоҡуғыңды һәм башҡа кешенең шундай уҡ хоҡуғын таныу;

***хеҙмәт тәрбиәһендә:***

технологик һәм социаль йүнәлешле ғәмәли мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә (ғаилә, мәктәп, ҡала, өлкә сиктәрендә) актив ҡатнашыуға күрһәтмә, ундай йүнәлешле эшмәкәрлек төрөн планлаштырыу, инициировать итеү һәләтлеге һәм үҙаллы эшләү;

төрлө төрҙәге эш һәм һөнәрҙе практик өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу, шул иҫәптән өйрәнелгән предмет белемен ҡулланыу нигеҙендә һәм филолог, журналист, яҙыусыларҙың эшмәкәрлеге менән танышыу;

хеҙмәткә һәм хеҙмәт эшмәкәрлеге һөҙөмтәләренә ихтирам; шәхси һәм йәмғиәт ҡыҙыҡһыныуын һәм ихтыяждарын иҫәпкә алып, белем биреүҙең троекторияһын төҙөү һәм тормош пландарын аңлы рәүештә һайлау; киләсәккә үҙ пландарыңды һөйләй белеү;

***экологик тәрбиәлә:***

тирә-яҡ мөхит өлкәһендәге мәсьәләләрҙе хәл иткәндә тәбиғи һәм социаль ғилем өлкәһендәге белемде ҡулланыуға йүнәлеш, ҡылыҡтарыңды планлаштырыу һәм тирә-яҡ мөхиткә зыян итеүсе һөҙөмтәләрҙең булыу ихтималлығын баһалау;

экологик проблемаға ҡарата үҙ ҡарашыңды теүәл һәм эҙмә-эҙлекле сағылдыра белеү;

экологик мәҙәниәт кимәлен күтәреү, глобаль характерҙағы экологик проблеманы һәм уны хәл итеү юлдарын таныу;

тирә-яҡ мөхиткә зыян килтереүсе ҡылыҡтарҙы ҡабул итмәү, шул иҫәптән экологик проблеманы күтәргән әҙәби әҫәрҙәр менән танышыуҙа формалашҡандарын;

тәбиғәткә зыян итеүсе эшмәкәрлекте ҡабул итмәү;

тәбиғәт, технологик һәм социаль мөхит менән бәйләнеш шарттарында гражданин һәм ҡулланыусы булараҡ үҙеңдең ролеңде таныу;

экологик йүнәлешле практик эшмәкәрлектә ҡатнашыуға әҙерлек;

***ғилми белем алыу ҡиммәттәрендә:***

кеше үҫешенең, тел үҫешенең төп ҡануниәттәре, кеше, тәбиғәт һәм йәмғиәт, тәбиғәт һәм социаль мөхит менән кешенең үҙ-ара бәйләнеше тураһында ғилми күҙалауҙың заманса системаһы эшмәкәрлегенә йүнәлеш;

тел һәм уҡыу мәҙәниәте, донъяны танып белеү сараһы булараҡ уҡыу күнекмәләрен үҙләштереү;

мәктәптә тел буйынса белем биреү үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, тикшеренеү эшмәкәрлегенең төп күнекмәләрен үҙләштереү; тәжрибә, күҙәтеү;

ҡылыҡтарҙы ҡабул итеүгә күрһәтмә һәм шәхсән, коллектив именлегенә өлгәшеү юлдарын камиллаштырыуға ынтылыу;

**Социаль һәм тәбиғәт мөхитендәге үҙгәреш шарттарында *уҡыусыларҙың яраҡлашыуын* тәьмин итеүсе шәхсән һөҙөмтәләр:**

уҡыусыларҙың төркөмдә һәм профессиональ эшмәкәрлек буйынса формалашҡан социаль тормош берлеге формаларын, шулай уҡ башҡа мәҙәни мөхиттәге кешеләр, ғаилә, төркөм менән социаль бәйләнештә булған социаль тәжрибәне, төп социаль ролде, норма һәм йәмғиәт тәртип ҡағиҙәләрен үҙләштереү;

уҡыусыларҙың билдәһеҙлелек шарттарында үҙ-ара килешеп эш итеү, тәжрибә алыуға һәм башҡалырҙың белемдәрен үҙләштереүгә әҙер булыу һәләтлелеге;

билдәһеҙлелек шарттарында эшләү һәләте, практик эшмәкәрлек аша үҙеңдең компетентлыҡ кимәлен күтәреү, шул иҫәбтән башҡа кешеләрҙән уҡырға өйрәнеү, берҙәм эшмәкәрлектә башҡаларҙың тәжрибәһенән сығып, яңы белем, күнекмә һәм компетенция алыу һәләтлелеге;

образдарҙы асыу һәм бәйләү күнекмәһе, яңы белемде формалаштырыу һәләте, объект һәм күренеш тураһында идея, аңлатма, гипотезаны формалаштырыу һәләте, шул иҫәптән элек билдәле булмағандарын, үҙ белем һәм компетенцияңдың етешмәүен аңлау, үҙ үҫешеңде планлаштырыу;

ныҡлы үҫеш концепцияһы өлкәһендә төп аңлатма, термин һәм күҙ алдына килтереүҙәргә таяныып эш итә белеү, тәбиғәт, йәмғиәт һәм иҡтисадтың бер-береһенә бәйләнешен анализлау һәм асыу, тирә-яҡ мөхиткә йоғонтоһон иҫәпкә алып, үҙ эшеңде баһалау, маҡсатҡа өлгәшеү һәм ҡаршылыҡтарҙы, мөмкин булған глобаль эҙемтәһен еңеп сығыу;

стресс ситуацияларҙы аңлау һәләте, тормош, телмәр һәм уҡыу тәжрибәһенә таяныып, булған үҙгәрештәрҙе һәм һөҙөмтәне баһалау; контрмер талап иткән саҡырыу булараҡ, стресс ситуацияны ҡабул итеү; стресс ситуацияһын баһалау, ҡабул ителәсәк ҡарар һәм эшмәкәрлеккә

төҙәтмәләр индереү; аҙарткылыҡ һәм һөҙөмтәне формалаштырыу һәм баһалау, тәжрибәне булдырыу, килеп тыуған ситуацияның ыңғай яҡтарын таба белеү; уңыш гарантияһы булмаған осраҡта эш итергә әҙер булыу.

**МЕТАПРЕДМЕТ ҺӨҘӨМТӘЛӘР**

универсаль уҡыу **танып-белеү хәрәкәттәрен** үҙләштереү

***Төп логик хәрәкәт:***

тел берәмектәрен, тел күренештәрен һәм процестарҙың мөһим билдәләрен характерлау һәм асыу;

тел берәмеге (күренеш) классификацияһының төп билдәһен, дөйөмләштереү һәм сағыштырыу өсөн нигеҙҙе, үткәреләсәк анализдың критерияларын билдәләү; тел берәмектәренең әһәмиәтле билдәләрен классификациялау;

ҡуйылған кәрәкле уҡыу мәсьәләһен хәл итеү өсөн мәғлүмәттең етмәүен асыҡлау;

тел процестарын өйрәнеүҙә сәбәп-тикшеренеү бәйләнештәрҙе асыҡлау; дедуктив һәм индуктив аналогия буйынса һөҙөмтә ҡулланып һығымта эшләү, бер-береһенә бәйләнеш буйынса гипотеза формалаштырыу;

төрлө төрҙәге текстар, төрлө тел берәмектәре менән эшләү барышында, хәл итеү варианттарын сағыштырып һәм үҙаллы билдәләгән критерийҙарҙы иҫәпкә алып, ҡулайлы вариантты һайлап, уҡыу мәсьәләһенең сиселешен үҙаллы һайлау.

***Төп тикшеренеү эшмәкәрлеге:***

тел белемендә һорауҙы белем алыуҙың тикшеренеү инструменты буларак ҡулланыу;

ысынбарлыҡ һәм теләгән хәл торош ситуацияһы араһында тап килмәгәнлекте теркәүсе һорауҙы формалаштырыу, эҙләнә торған һәм ысынбарлыҡты үҙаллы билдәләү;

үҙ фекере йөрөтөүеңде һәм башҡаларҙың фекеренең дөрөҫлөгө тураһында гипотеза формалаштырыу, үҙ гипотезаңды һәм фекереңде аргументлау;

эшмәкәрлектең алгоритмын төҙөү һәм уны уҡыу мәсьәләһен сисеүҙә ҡулланыу;

тел берәмектәренең, процестарҙың, сәбәп-тикшеренеү бәйләнештәрҙең һәм объектарҙың бер-береһенән бойондороҡло булыу үҙенсәлектәрен билдәләү буйынса үҙаллы төҙөлгән план буйынса ҙур булмаған тикшеренеү үткәреү;

лингвистик тикшеренеү (эксперимент) барышында алынған мәғлүмәттең ысынбарлыҡҡа тап килеүен һәм ҡулланылышлы булыуын тикшереү;

алып барылған күҙәтеү, тикшеренеү һөҙөмтәләре буйынса дөйөмләштереү һәм һығымтаны үҙаллы формалаштырыу; алынған дөйөмләштереү һәм һығымтаның ысынбарлыҡҡа тап килеүен баһалау инструменттары менән ҡулланыу;

оҡшаш һәм ҡулайлы ситуацияларҙа мөмкин булған артабанғы үҫеш процесын, ваҡиғалар һәм уларҙың һөҙөмтәләрен прогнозлау, шулай уҡ яңы шарттар һәм контекстарҙа уларҙың үҫеше тураһында фараз итеү.

***Мәғлүмәт менән эшләү:***

тәҡдим ителгән уҡыу мәсьәләһен һәм бирелгән критерийҙарҙы иҫәпкә алып, мәғлүмәтте эҙләүҙә һәм һайлауҙа төрлө метод, инструметтарҙы ҡулланыу;

текст, таблица һәм схемала бирелгән мәғлүмәтте һайлау, анализлау, интерпретациялау, дөйөмләштереү һәм системалаштырыу;

текстағы мәғлүмәттең дөрөҫлөгө һәм ҡулланылышы күҙлегенән баһалау өсөн төрлө төрҙәге аралашыу һәм уҡыуҙы ҡулланыу һәм уҡыу мәсьәләһен хәл итеү маҡсатынан кәрәкле мәғлүмәтте үҙләштереү;

ҡуйылған маҡсаттарҙы иҫәпкә алып, мәғлүмәтте алыу, дөйөмләштереү һәм системалаштырыу өсөн мәғәнәле уҡыуҙы ҡулланыу;

төрлө мәғлүмәти сығанаҡтарҙа тап килгән аргументтарҙы (раҫлаусы йә кире ҡағыусы бер үк идеяны, версияны) табыу;

мәғлүмәтте (текст, презентация, таблица, схема) тәҡдим итеүҙең ҡулайлы формаһын үҙаллы һайлау һәм хәл ителәсәк мәсьәләне ауыр булмаған диаграмма, графика һәм, коммуникатив күрһәтмә бәйләнешендә уның комбинацияларын иллюстрациялау;

уҡытыусы тарафынан тәҡдим ителгән йә үҙаллы аныҡ итеп әйтелгән критериялар

буйынса мәғлүмәттең ышаныслылығын баһалау;

мәғлүмәтте эффектлы иҫтә ҡалдырыу һәм системалаштырыу.

Универсаль уҡыу **коммуникатив хәрәкәттәрен** үҙләштереү

***Аралашыу:***

фекерҙе ҡабул итеү һәм аныҡ итеп әйтеү, аралашыуҙың шарт һәм маҡсатына ярашлы эмоцияңды белдереү; диалог һәм дискуссияларҙа, телдән монологик телмәрҙә һәм яҙма текстарҙа үҙеңде (үҙеңдең ҡарашыңды) белдереү;

вербаль булмаған аралашыу сараларын таныу, социаль тамғаларҙың мәғәнәһен аңлау;

конфликт ситуацияларҙың тәүшарттарын белеү һәм таныу һәм конфликты йомшартыу, һөйләшеү алып барыу;

башҡаларҙың ниәттәрен аңлау, әңгәмәләшеүсеңә ихтирам күрһәтеү һәм корректлы формала үҙеңдең килешмәүеңде аныҡ итеп әйтеү;

диалог/дискуссия барышында мәсьәләләрҙе хәл итеү маҡсатынан һәм аралашыуҙың ыңғай хәл итеүен ҡеүәтләп, тема буйынса һорау биреү һәм үҙ идеяларыңды әйтеү;

диалогта ҡатнашыусыларҙың фекерен фекереӊ менән сағыштырыу, позицияларҙың айырмалы һәм оҡшаш яҡтарын табыу;

үткәрелгән тел анализы, эшләнелгән лингвистик эксперимент, эҙләнеү, проект һөҙөмтәләрен халыҡ алдында тәҡдим итеү;

презентацияның маҡсатын һәм аудиторияның үҙенсәлеген иҫәпкә алып, сығыш форматын үҙаллы һайлау һәм күргәҙмә материалды ҡулланып, уға ярашлы телдән һәм яҙма текст төҙөү.

***Берҙәм эшмәкәрлек:***

тәғәйен проблеманы хәл итеүҙә командала һәм шәхсән эштең өҫтөнлөгөн аңлау һәм ҡулланыу, ҡуйылған мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә төркөм менән эшләү формаһын ҡулланыуҙың кәрәклеген нигеҙләү;

берҙәм эшмәкәрлектең маҡсатын ҡабул итеү, уға өлгәшеү өсөн коллектив менән планлаштырыу һәм хәрәкәтте башҡарыу: ролдәрҙе бүлеп биреү, килешеү, процесты һәм бергә эшләүҙең һөҙөмтәһен тикшереү; бер-нисә кешенең фекерен дөйөмләштерә белеү, етәкселек итергә әҙерлекте күрһәтеү, ҡушҡан эште башҡарыу, бойһоноу;

берҙәм эшмәкәрлекте ойошторууҙы планлаштырыу, үҙеңдең роленде (берҙәм эшмәкәрлектә ҡатнашыусыларҙың барыһының да өҫтөнлөктәрен һәм мөмкинлектәрен иҫәпкә алып) билдәләү, команда ағзалары араһында мәсьәләләрҙе бүлеп биреү, төркөм формаһындағы эштә (фекер алышыу, “мейе штурмы” һәм башҡалар) ҡатнашыу;

үҙеңә бүленгән эште башҡарыу, үҙ эшеңдең йүнәлеше буйынса сифатлы һөҙөмтәгә өлгәшеү һәм командалағы башҡа ағзаларҙың эштәре менән үҙ эшеңде тиңләү;

дөйөм һуңғы һөҙөмтәгә һалған өлөшөңдөң сифатын эшмәкәрлектә ҡатнашыусыларҙың үҙаллы аныҡ итеп билдәләгән критерийҙар буйынса баһалау; баштағы мәсьәләнең һөҙөмтәләре һәм һуңғы һөҙөмтәгә өлгәшеү өсөн командалағы һәр ағзаның өлөшөн сағыштырыу һәм төркөм алдында отчет тәҡдим итергә әҙерлекте күрһәтеү.

Универсаль уҡыу **регулятив эшмәкәрлекте** үҙләштереү

***Үҙ ойоштороу:***

уҡыу мәсьәләһе һәм тормош ситуацияларын хәл итеү өсөн проблемаларҙы асыу;

хәл итеүҙе ҡабул итеүҙә төрлө йүнәлештәрҙе (шәхсән, төркөмдә хәл итеүҙә) ала белеү;

мәсьәләне сисеүҙә (йә уның өлөшөн) үҙаллы алгоритм төҙөү, булған ресурстарҙы һәм үҙ мөмкинлектәреңде иҫәпкә алып, уҡыу мәсьәләһен сисеүҙең ысулын һайлау, хәл итеүҙең мөмкин булған варианттарын аргументлау;

үҙаллы эшмәкәрлек планын төҙөү, уны тормошҡа ашырыуҙа кәрәкле төҙәтмәләр индереү;

хәл итеүҙе һайлап алыу һәм яуаплылыҡты үҙ өҫтөңә алыу.

***Үҙ баһалау:***

үҙ контролдең (шул иҫәптән телмәр), үҙ мотивация һәм рефлексияның төрлө ысулдарына эйә булыу;

уҡыу ситуацияһына адекват баһа биреү һәм уны үҙгәртеү буйынса план тәҡдим итеү;

уҡыу мәсьәләһен хәл итеүҙә буласаҡ ауырлыҡтарҙы күҙаллау һәм уны үҙгәртелгән осраҡта хәл итеүҙе көйләү;

эшмәкәрлек һөҙөмтәләренә өлгәшеүҙең (өлгәшмәүҙең) сәбәбен аңлатыу; коммуникатив уңышһыҙлыҡтарҙың сәбәбен аңлау һәм уны иҫкәртә белеү, үҙләштерелгән телмәр тәжрибәһенә баһа биреү, маҡсат һәм аралашыу шарттарын иҫәпкә алып, үҙ телмәреңде корректировкалау; маҡсат һәм аралашыу шарттары һөҙөмтәһенең тап килеүен баһалау.

***Эмоциональ интеллект:***

үҙ эмоцияң һәм башҡаларҙың эмоцияһы менән идара итеү һәләтен үҫтереү;

эмоцияның сәбәптәрен асыу һәм анализлау; телмәр ситуацияһын анализлауҙа башҡа кешенең дәлил һәм ниәттәрен аңлау; үҙ эмоцияларыңды сағылдырыуҙың ысулдарын көйләү.

***Үҙеңде һәм башҡаларҙы ҡабул итеү:***

башҡа кешенең һәм үҙ фекереңә аңлы ҡарау; үҙеңдең һәм башҡаларҙың хаталаныуға хоҡуғын таныу;

үҙеңде һәм башҡаларҙы тәнҡитләмәй ҡабул итеү, асыҡлыҡ күрһәтеү;

тирә-яҡтағы бөтә нәмәне контролдә тотоп булмауҙы аңлау.

## ПРЕДМЕТ ҺӨҘӨМТӘЛӘРЕ:
## 5 КЛАСС

*Уҡыу йылы аҙағына 5 класс уҡыусылары эйә булыу күнекмәләре:*

- төрлө төрҙәге диалог алып барыу;
- уҡылған текстың төп йөкмәткеһен һөйләү (күләме — 10–12 фраза);
- башҡарылған проект эшенең һөҙөмтәләрен ҡыҫҡаса еткереү (күләме — 10–12 фраза);
- айырым таныш булмаған һүҙҙәрҙе үҙ эсенә алған ауыр булмаған текстарҙың төп йөкмәткеһен (уҡыу өсөн текстың күләме — 150–250 һүҙ) аңлау һәм үҙ алдыңа уҡыу;
- байрам менән ҡотлап, ҙур булмаған ҡотлауҙар яҙыу, үҙең тураһында төп мәғлүмәт еткереп, анкета һәм формулярҙар тултырыу, телмәр этикетын һаҡлап, шәхси характерҙа электрон хәбәр яҙыу, (хәбәрҙәрҙең күләме — 60 һүҙгә тиклем);
- бирелгән тема һәм уҡылған текстың йөкмәткеһе буйынса һөйләй белеү (һөйләү);
- һүҙлек һүҙҙәрҙе белеү, уларҙы телмәрҙә ҡуллана алыу (һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр, бәләкәй текстар төҙөү);
- фонетик күнекмәләрҙе үҙләштереү: ишетелгәндәрҙе айырыу, хатаһыҙ, ритмик-интонацион үҙенсәлектәрен һаҡлап, тел материалында төҙөлгән, уҡыу ҡағиҙәләрен һаҡлап, тейешле интонация менән, тексты аңлауыңды күрһәтеп, һүҙҙәрҙе дөрөҫ баҫым менән әйтеү, 90 һүҙгә тиклем ҙур булмаған текстарҙы ҡысҡырып тасуири уҡыу; төп уҡыу ҡағиҙәләренә яраҡлы яңы һүҙҙәрҙе уҡыу;
- телдән һәм яҙма телмәрҙең, диалог менән монологтың, айырмалыҡтарын характерлау, практик-йүнәлешле уҡыу мәсьәләһен һәм көндәлек тормошта телмәр эшмәкәрлеге төрҙәре үҙенсәлектәрен иҫәпкә алыу;
- аудированиеның төрлө төрҙәрен үҙләштереү, төрлө функциональ-мәғәнәүи төрҙәге матур әҙәбиәт текстарын уҡыу;
- төрлө төрҙәге уҡыуҙы үҙләштереү: ҡарау, танышыу, өйрәнеү, эҙләнеү;
- орфоэпик һәм акцентологик норма варианттарын айырыу: һүҙҙәрҙең орфоэпик әйтелешен варианттарын (өйрәнелгән кимәлдә) иҫәпкә алып ҡулланыу;
- типик телмәр хаталарын айырыу: һөйләү телмәрендә телмәр хаталарын табыу һәм төҙәтеү; грамматик норма менән бәйле грамматик хаталарҙы таныу; телдән һәм яҙыу телмәрендә грамматик хаталарҙы табыу һәм төҙәтеү;
- официаль һәм официаль булмаған мөрәжәғәт итеүҙә этикет формаларын һаҡлау;

- аңлатмалы, орфоэпик һүҙлектәр, синонидар, антонимдар һүҙлеге, грамматик һүҙлектәр, белешмәләр ҡулланыу, шул иҫәптән мультимедийныйҙарҙы ҡулланыу; пунктуациянан орфографик һүҙлектәр һәм белешмәләр ҡулланыу;
- өндәрҙе характерлау: өн менән хәреф араһындағы айырмалыҡтарҙы аңлау, өн системаһын характерлау (ҡабатлау);
- һүҙгә фонетик анализ үткәреү;
- һүҙҙәрҙе әйтелештә һәм яҙылышта фонетика, графика һәм орфоэпия буйынса белемдәрҙе ҡулланыу;
- өйрәнелгән орфограммаларҙы таныу;
- дөрөҫ яҙыу практикаһында орфограмма буйынса белемдәрҙе ҡулланыу (шулай уҡ ь (нәҙек айырыу билдәһе) һәм ъ (ҡатылыҡ айырыу билдәһе) буйынса белемдәрҙе ҡулланыу);
- төрлө ысулдар менән (тамырҙаш һүҙҙәр һайлау, синоним, антоним һүҙҙәр табыу; контекст буйынса һүҙҙең мәғәнәһен табыу, аңлатмалы һүҙлек ярҙамында) һүҙҙең лексик мәғәнәһен аңлатыу;
- бер мәғәнәле һәм күп мәғәнәле һүҙҙәрҙе табыу, тура һәм күсмә мәғәнәле һүҙҙәрҙе айырыу;
- һүҙҙәргә лексик анализ үткәреү (үтелгәндәр кимәлендә). Лексик һүҙлектәр (аңлатмалы һүҙлек, синоним, антоним, омонимдар) һүҙлектәре менән ҡуллана белеү;
- һүҙҙең лексик-грамматик разряды булараҡ һүҙ төркөмдәре, һүҙҙең грамматик мәғәнәһе, уҡыу мәсьләһен практик-йүнәлешле хәл итеүҙә башҡорт телендәге һүҙ системаһы тураһында белемдәрҙе ҡулланыу;
- исем, сифат, ҡылымдарҙа (өйрәнелгән кимәлдә) баҫымдарҙы айырыу; исем, сифат, ҡылымдарҙа (өйрәнелгән кимәлдә) айырым грамматик нормаларҙа баҫымдарҙың нормаларын һаҡлау;
- синонимдар, антонимдар, омонимдар (өйрәнелгән кимәлдә) ҡулланыу нормаларын һаҡлау; һүҙҙәрҙе уларҙың мәғәнәһе һәм лексик яраҡлашыу ҡағиҙәләренә яраҡлы ҡулланыу;
- текста фразеологизмдарҙы таныу, уларҙың мәғәнәләрен билдәләй белеү; фразеологизмдарҙың ҡулланыу ситуацияһын характерлау;
- исем, сифат, ҡылым һәм алмаштарҙы өйрәнелгән орфограммалар менән дөрөҫ яҙыу нормаларын ҡулланыу;
- исемдәрҙең дөйөм грамматик мәғәнә, морфологик билдәләрен һәм синтаксик функцияһын билдәләү; телмәрҙә уның ролен аңлатыу;
- исемдәрҙең лексик-грамматик разрядтарын билдәләү;
- яңғыҙлыҡ исемдәрҙе, ҡыҫҡартылған исемдәрҙе дөрөҫ яҙыу нормаларын ҡулланыу;
- дөйөм грамматик мәғәнә, морфологик билдәләрҙе һәм сифаттың синтаксик функцияһын билдәләү; телмәрҙә уның ролен аңлатыу;
- өйрәнелгән орфограммалар менән сифаттарҙы дөрөҫ яҙыу нормаларын ҡулланыу;
- ҡылымдарҙың дөйөм грамматик мәғәнә, морфологик билдәләре һәм синтаксик функцияларын аңлатыу; ҡылымдарҙың һүҙбәйләнештәрҙә һәм һөйләмдәрҙә ролен аңлатыу; шулай уҡ телмәрҙә;
- алмаштарҙы таныу; уларҙың төркөмсәләрен (зат алмаштары, күрһәтеү алмаштары, һорау алмаштары, билдәләү алмаштары, билдәһеҙлек алмаштары, юҡлыҡ алмаштары, эйәлек алмаштары) айырыу; төп грамматик мәғәнәһен билдәләү; алмаштарҙы үҙгәртә белеү; уларҙы үҙгәртеү үҙенсәлектәрен, синтаксик функцияһын, телмәрҙәге ролен характерлау;

- башҡорт телмәр этикеты талаптарына яраҡлы алмаштарҙы, шул иҫәптән алдағы тексттың мәғәнәһенә яраҡлы (ике төрлө мәғәнәлекте, яңылышлыҡты булдырмау өсөн) 3-сө заттағы алмашты дөрөҫ ҡулланыу; алмаштарҙы дөрөҫ яҙыу нормаларын һаҡлау;
- пуктуацион күнекмәләрҙе үҙләштереү: һөйләм аҙағында нөктә, һорау һәм өндәү билдәләрен, һанап киткәндә, мөрәжәғәт иткәндә өтөрҙө ҡулланыу, шәхси характерҙағы электрон хәбәрҙе пунктуацион яҡтан дөрөҫ яҙыу;
- башҡорт телендә адресыңды, исем-фамилияларын (үҙеңдең, туғандарыңдың, дуҫтарыңдың, класташтарыңдың) дөрөҫ яҙыу;
- башҡорт телендәге материалдарҙы, ИКТ ҡулланып, ауыр булмаған уҡыу-уҡытыу проекттарҙа ҡатнашыу;
- төрлө төрҙәге лексик һүҙлектәр (аңлатмалы, синоним, антоним, фразеологизм) ҡулланыу;
- сит телдәге һүҙлектәр,  белешмәләр, шул иҫәптән электрон формала мәғлүмәти-белешмә системаларҙы ҡулланыу.

**6 КЛАСС**

*Уҡыу йылығы аҙағына 6 класс уҡыусылары эйә булыу күнекмәләре:*

- төрлө төрҙәге диалог алып барыу (һәр бер аралашыусының 12-гә тиклем реплика)
- төрлө төрҙәге монологик уй-фекере булдырыу ( һүрәтләү, шул иҫәптән характеристика, хәбәр итеү) (монологик сығыштың күләме — 12–15 фраза);
- уҡылған тексттың төп йөкмәткеһен һөйләү (күләме — 12–15 фраза);
- башҡарылған проект эшенең һөҙөмтәләрен ҡыҫҡаса еткереү (күләме — 12–15 фраза); уҡылған тексты ҡабул итеү һәм ҡуйылған коммуникатиу бурыстарға ярашлы таныш булмаған һүҙҙәр үҙ эсенә алған ауыр булмаған текстарҙы аңлау: төп йөкмәткеһен аңлап, һоралған мәғлүмәтте аңлап (тексты тыңлау өсөн — 1,5 минутҡа тиклем);
- айырым таныш булмаған һүҙҙәрҙе үҙ эсенә алған ауыр булмаған текстарҙың төп йөкмәткеһен (уҡыу өсөн тексттың күләме — 170–310 һүҙ) аңлау һәм үҙ алдыңа уҡыу;
- телмәр этикеты нормаларына яраҡлы анкеталар һәм формулярҙар тултырыу; телмәр этикетын һаҡлап, шәхси характерҙағы электрон хәбәрҙәр яҙыу; өлгөгә, план, төп һүҙ, һүрәттәргә нигеҙләнеп, ҙур булмаған яҙма булдырыу;
- план, яҙма хәбәр төҙөү, проект эшмәкәрлектең һөҙөмтәһен ҡыҫҡаса әйтеп биреү;
- текст буйынса һүҙҙең мәғәнәһен билдәләү йә һүҙлек, Интернет һәм башҡалар ярҙамында дөрөҫләү;
- грамоталы яҙыу нигеҙҙәрен үҙләштереү: төп орфографик һәм пуктуацион күнекмәләр(өйрәнелгән курс күләмендә), үҙ һәм тәҡдим ителгән тексты яҙғанда орфографик ҡағиҙәләр һәм тыныш билдәләре ҡағиҙәләрен дөрөҫ ҡулланыу;
- башҡорт телендә телдән һәм яҙма телмәрҙе аңлау;
- орфографик күнекмәләрҙе үҙләштереү: өйрәнелгән һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙыу; пунктуацион күнекмәләрҙе үҙләштереү; һөйләм аҙағында нөктә, һорау һәм өндәү билдәләрен ҡулланыу; һанап киткәндә, өндәш һүҙҙәрҙә өтөрҙәр ҡулланыу; шәхси характерҙағы электрон хәбәрҙәрҙе дөрөҫ яҙыу;
- тексттың төп билдәләрен таныу; тексты композицион-мәғәнәүи өлөштәргә (абзацтар) бүлеү; һөйләмдәрҙең һәм текст бүлектәренең (һүҙ формаһы, тамырҙаш һүҙҙәр, синонимдар, антонимдар, эйәлек заты алмаштары, һүҙҙәр ҡабатланыуы) бәйләнеү сараларын таныу; алған белемдәрҙе үҙ текстарыңды (телдән һәм яҙма) төҙөүҙә ҡулланыу;

– текстың төп билдәләре (хикәйәләү, фекер йөрөтөү) буйынса булған белемдәрҙе практикала ҡулланыу;

– тормош тәжрибәһенә һәм укыу тәжрибәһенә таянып, текст-хикәйәләү төҙөү;

– һөйләү телмәренең үҙенсәлектәре, функциональ стиль, матур әҙәбиәт әҫәрҙәренең теле тураһында дөйөм күҙаллай белеү;

– һөйләү һәм яҙма телмәрҙә даталарҙы һәм һандарҙы билдәләү өсөн һандарҙы (ябай һәм ҡушма һандар. Һан төркөмсәләре: төп һандар, рәт һандары, йыйыу һандары, бүлем һәм сама һандары, кәсер) һәм рәүештәрҙе (төп рәүеш, сәбәп-маҡсат рәүеше, ваҡыт рәүеше, урын рәүеше, күләм-дәрәжә, сағыштырыу, сәбәп-маҡсат рәүештәре. Рәүештәрҙең сағыштырыу һәм артыҡлыҡ дәрәжәләрен) ҡулланыу;

– морфологик берәмек булараҡ (исем һәм рәүештәрҙе) текстарҙа таныу;

– һандарҙы таныу; һандарҙың төп грамматик мәғәнәһен билдәләү, һандарҙың төркөмсәләрен мәғәнәһе һәм төҙөлөшө буйынса айырыу;

– һандарҙы үҙгәртеү һәм үҙенсәлектәрен, синтаксик функцияһын характерлау; телмәрҙә һандарҙың ролен, фәнни мәҡәләләрҙә, эшлекле телмәрҙә уларҙы ҡулланыу үҙенсәлектәрен билдәләү;

– телмәрҙә рәүештәрҙе таныу; рәүештең дөйөм грамматик мәғәнәһен билдәләү; мәғәнәһе яғынан рәүеш төркөмсәләрен айырыу; уларҙың синтаксик билдәләрен, телмәрҙәге ролен характерлау;

– телдән һәм яҙма телмәрҙә айырыуса ҡулланылышлы лексиканы аңлау һәм ҡулланыу;

– уҡыу-уҡытыу һәм көнкүреш аралашыу ситуацияларында телмәр этикеты нормаларын һаҡлау;

– башҡорт телендә иркен һөйләшеүселәр менән телдән һәм яҙма аралашҡанда бер-береңде аңлауға өлгәшеү;

– аңлатмалы һүҙлек, мәҡәлдәр һәм әйтемдәр һүҙлеге, фразеологик һүҙлектәр, сит телдәр һүҙлеге, уҡыу этимологик һүҙлек, грамматик һүҙлек һәм белешмәләр, орфографик һүҙлектәр, пунктуация буйынса (шулай уҡ мультимедийные) белешмәләр ҡулланыу;

– өйрәнелгән тематика кимәлендә объекттарҙы, күренештәрҙе, процестарҙы, уларҙың элементтары һәм төп фнкцияларын сағыштырыу (шул иҫәптән сағыштырыу өсөн нигеҙ булдырыу).

## 7 КЛАСС

*Укыу йылығы аҙағына 7 класс укыусылары эйә булыу күнекмәләре:*

– төрлө төрҙәге диалог алып барыу (һәр бер аралашыусының 15-гә тиклем реплика)

– тематик йүкмәткеле телмәр кимәлдә төрлө төрҙәге монологик хәбәрҙәр булдырыу ( һүрәтләү, шул иҫәптән характеристика, хәбәр итеү) тематик йүкмәткеле телмәр кимәлдә (монологик сығыштың күләме — 17–17 фраза);

– уҡылған текстың төп йөкмәткеһен вербаль һәм күреү нигеҙләнеп, уҡылған/тыңланған текстың төп йөкмәткеһен һөйләү (күләме — 15–17 фраза);

– башҡарылған проект эшенең һөҙөмтәләрен ҡыҫҡаса еткереү (күләме — 15–17 фраза);

– уҡылған тексты ҡуйылған коммуникатив бурыстарға ярашлы таныш булмаған һүҙҙәр үҙ эсенә алған ауыр булмаған текстарҙы аңлау: төп йөкмәткеһен аңлап, һоралған мәғлүмәтте аңлап (тексты тыңлау өсөн — 2 минутҡа тиклем) ҡабул итеү;

– айырым таныш булмаған һүҙҙәрҙе үҙ эсенә алған ауыр булмаған

текстарҙы үҙаллы уҡыу; ҡуйылған коммуникатив бурыстарға яраҡлы тексттың йөкмәткеһен аңлау тәрәнлеге, кәрәкле мәғлүмәтте аңлау, мәғлүмәтте тулыһынса аңлау (уҡыу өсөн тексттың күләме — 200–350 һүҙ), тулы булмаған тексты (таблицалар, диаграммалар) һәм уларҙа күрһәтелгән мәғлүмәтте аңлау, текста төп күренештәрҙең эҙмә-эҙлелеген билдәләү;

– телде мәҙәниәт һәм халыҡ тарихы менән тығыҙ бәйләнешен билдәле миҫалдар аша күрһәтеү;

– башҡорт телмәренең мәҙәни нормаларын Рәсәйҙә йәшәүсе башҡа халыҡтарҙың мәҙәни ҡағиҙәләре менән сағыштырыу;

– башҡорт телмәр этикет нигеҙендә ятыусы (тупаҫ һүҙҙәрҙе, һөйләштә ҡәтғи тыйыуҙарҙы һ.б ҡулланыуҙы тыйыу) аралашыуҙың этикет принциптарын ҡулланыу; башҡорт вербаль булмаған нормаларҙы һаҡлау;

– үҙеңдең һәм башҡа кешенең телмәрендә булған хаталарҙы хәҙерге башҡорт әҙәби теле нормалары күҙлегенән анализлау һәм баһалау;

– һорауҙарға яуап бирә белеү, башҡорт телендә һорауҙар биреү, бирелгән темаға картина буйынса һөйләмдәр төҙөү;

– аңлатмалы һүҙлек, синоним, антоним һүҙлектәр; грамматик һүҙлектәр һәм белешмәләр, шул иҫәптән мультимедийный һүҙлектәр ҡулланыу; орфографик һүҙлектәр һәм пунктуация буйынса белешмәләр ҡуллана белеү;

– тексты төп билдәләренә ярашлы булыу күҙлегенән анализлау; унын унын йөкмәткеһен аңлау, текст йөкмәткеһе буйынса фекер алышыу;

– текст буйынса һорауҙар, план төҙөү, уға яраҡлы текст йөкмәткеһен һөйләү;

– телдән һәм яҙма телмәрҙә ярҙамсы һүҙ төркөмдәрен (теркәүес, бәйләүес, киҫәксә, мөнәсәбәт һүҙҙәр, ымлыҡ, оҡшатыу һүҙҙәрен) таныу һәм ҡулланыу;

– ярҙамсы һүҙ төркөмдәренә дөйөм характеристика биреү; уларҙың үҙаллы һүҙ төркөмдәренән айырмалы яҡтарын билдәләү;

– мәғәнәләре һәм стилистик үҙенсәлектәренә ярашлы бәйләүестәрҙе телмәрҙә ҡулланыу; уларҙы дөрөҫ яҙыу нормаларын һаҡлау;

– киҫәксәләрҙең морфологик билдәләрен, телмәрҙәге, синтаксик вазифаларын билдәләү;

– мөнәсәбәт һүҙҙәрҙең синтаксик ролен билдәләү; мөнәсәбәт һүҙҙәрҙең мәғәнәһен һәм телмәрҙә ҡулланышын аңлау;уларҙы һөйләү телмәрендә һәм матур әҙәбиәт әҫәрҙәрендә ҡулланыу үҙенсәлектәрен характерлау;

– телмәрҙә мөнәсәбәт һүҙҙәрҙе дөрөҫ ҡулланыу һәм дөрөҫ яҙыу нормаларын һаҡлау;

– телмәрҙә ымлыҡтарҙың ролен аңлатыу; һөйләү телмәрендә һәм матур әҙәбиәттә ымлыҡтарҙың ҡулланыу үҙенсәлектәрен характерлау;

– оҡшатыу һүҙҙәрен телмәрҙә ҡулланыу һәм дөрөҫ интонация менән уҡырға өйрәтеү; яҙыуҙа тыныш билдәләрен дөрөҫ ҡуйыу.

**8 КЛАСС**

*Уҡыу йылығы аҙағына 8 класс уҡыусылары эйә булыу күнекмәләре:*

– төрлө төрҙәге диалог алып барыу (этикет характерындағы диалог, диалог – хәрәктә өндәү, диалог-һорашыу; төрлө төрҙәге диалогты үҙ эсенә алған ҡатнаш диалог )(һәр бер аралашыусының 17-гә тиклем реплика)

– тематик йүкмәткеле телмәр кимәлдә төрлө төрҙәге монологик хәбәрҙәр булдырыу (һүрәтләү, шул иҫәптән характеристика, хәбәр итеү) тематик йөкмәткеле телмәр кимәлдә (монологик сығыштың күләме — 17–19 фраза); укылған текстың төп йөкмәткеһен һөйләү (күләме — 17–19 фраза);

– башҡарылған проект эшенең һөҙөмтәләрен ҡыҫҡаса еткереү (күләме — 17–19 фраза);

– уҡылған тексты ҡабул итеү һәм ауыр булмаған шул уҡ кимәлдәге тексты аңлау; ҡуйылған коммуникатив бурыстарға ярашлы таныш булмаған һүҙҙәрҙе үҙ эсенә алған ауыр булмаған текстарҙы аңлау: төп йөкмәткеһен аңлап, һоралған мәғлүмәтте аңлап (тексты тыңлау өсөн — 2,5 минутҡа тиклем); текстың йөкмәткеһен алдағы хәбәр итеүҙәргә ҡарап күҙҙаллау;

– айырым таныш булмаған һүҙҙәрҙе үҙ эсенә алған ауыр булмаған текстарҙы үҙаллы уҡыу; ҡуйылған коммуникатив бурыстарға яраҡлы текстың йөкмәткеһен аңлау тәрәнлеге, кәрәкле мәғлүмәтте аңлау, мәғлүмәтте тулыһынса аңлау (уҡыу өсөн текстың күләме — 300–450 һүҙ), тулы булмаған тексты (таблицалар, диаграммалар) һәм уларҙа күрһәтелгән мәғлүмәтте аңлау, текста төп күренештәрҙең эҙмә-эҙлелеген билдәләү;

– тексты ҡайтанан эшкәртеү күнекмәләрен үҙләштереү: уҡылған тексҡа план төҙөү (ябай, ҡатмарлы) артабан тексты телдән һәм яҙма формала йөкмәкеһен һөйләү маҡсаты менән; уҡылған һәм тыңланған текста төп һәм икенсел мәғлүмәтте айырып алыу; текст йөкмәткеһен һөйләү; тексты мәғлүмәти эшкәртеү сараларын ҡулланыу; төрлө сығанаҡтарҙан, шулай уҡ лингвистик һүҙлектәрҙән һәм белешмәләрҙән мәғлүмәт алыу һәм уны уҡыу-уҡытыу эшмәкәрлегендә ҡулланыу;

– синтаксистың төп берәмектәрен (һүҙбәйләнеш, һөйләм) таныу;

– һөйләмдең грамматик нигеҙен табыу: баш һәм эйәрсән киҫәктәрҙе таныу;

– эйә менән хәбәр араһында һыҙыҡ ҡуйылыу нормаларын ҡулланыу;

– әйтелеү маҡсаты, эмоциональ биҙәлеше буйынса һөйләмдәрҙе таныу; уның интонацион һәм мәғәнәүи үҙенсәлектәрен характерлау (ҡабатлау);

– өйрәнелгән тыныш билдәләренең функцияһын аңлау; һүҙбәйләнеш, уның һөйләмдән айырмаһын билдәләү;

– телмәр практикаһында һүҙбәйләнештәрҙе төҙөү нормаһын ҡулланыу;

– һөйләмдең төп билдәләрен, телдән һәм яҙма телмәрҙә һөйләмдәрҙе төҙөү сараларын характерлау;

– әйтелеү маҡсаты, эмоциональ биҙәлеше буйынса һөйләмдәрҙе таныу; уның интонацион һәм мәғәнәүи үҙенсәлектәрен характерлау;

– һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре барлығы, тулы һәм кәм һөйләмдәр (кәм һөйләмдәрҙең диалогик телмәрҙә ҡулланыу үҙенсәлектәрен аңлау) яғынан таныу;

– социомәҙәни белем һәм күнекмәләрҙе үҙләштереү; шәхес- ара һәм мәҙәни- ара аралашыуҙы тормошҡа ашырыу;

– тыуған илеңә, үҙ республикаңа ҡарата (мәҙәни саралар һәм күренештәр; күренекле урындар, бөйөк шәхестәр) ҡарата ғорурлыҡ тойғоһон белдереү;

– көндәлек аралашыу ситуацияларында (объектың урынлашыу урынын, унда бара торған маршрутты һ.б) сит илдән килгән ҡунаҡтарға аңлатыу;

– һайлап алынған тематик йөкмәтке кимәлендә официаль һәм официаль булмаған аралашыу ситуацияһында телмәр төрлөлөгөн аңлау;

– телмәр эшмәкәрлеге төрҙәрендә (һөйләү һәм яҙыу телмәрендә) коммуникатив мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн бер -нисә вариантты ҡарау.

## 9 КЛАСС

*Уҡыу йылығы аҙағына 9 класс уҡыусылары эйә булыу күнекмәләре:*

– үҙ эсенә төрлө төрҙәге диалогтарҙы телмәр этикет нормаларын һаҡлап алып барыу (һәр бер аралашыусының 20-гә тиклем реплика)

– тематик йүкмәткеле телмәр кимәлдә төрлө төрҙәге монологик хәбәрҙәр булдырыу ( һүрәтләү, шул иҫәптән характеристика, хәбәр итеү) тематик йүкмәткеле телмәр кимәлдә (монологик сығыштың күләме — 20–22 фраза); уҡылған тексттың төп йөкмәткеһен һөйләү (күләме — 20–22 фраза);

– башҡарылған проект эшенең һөҙөмтәләрен ҡыҫҡаса еткереү (күләме — 20–22 фраза);

– уҡылған тексты ҡабул итеү һәм ауыр булмаған шул уҡ кимәлдәге тексты аңлау; ҡуйылған коммуникатив бурыстарға ярашлы таныш булмаған һүҙҙәр үҙ эсенә алған ауыр булмаған текстарҙы аңлау: төп йөкмәткеһен аңлап, һоралған мәғлүмәтте аңлап (тексты тыңлау өсөн — 3,5 минутҡа тиклем); тексттың йөкмәткеһен алдағы хәбәр итеүҙәргә ҡарап күҙаллау;

– тексты ҡайтанан эшкәртеү күнекмәләрен үҙләштереү: уҡылған тексҡа план төҙөү (ябай, ҡатмарлы) артабан тексты телдән һәм яҙма формала йөкмәкеһен һөйләү маҡсаты менән; уҡылған һәм тыңланған текста төп һәм икенсел мәғлүмәтте айырып алыу; текст йөкмәткеһен һөйләү; тексты мәғлүмәти эшкәртеү сараларын ҡулланыу; төрлө сығанаҡтарҙан, шулай уҡ лингвистик һүҙлектәрҙән һәм белешмәләрҙән мәғлүмәт алыу һәм уны уҡыу-уҡытыу эшмәкәрлегендә ҡулланыу;

– бирелгән темаға сығышыңды презентация формаһында күрһәтеү; тыңланған йә уҡылған фәнни-уҡыу-уҡытыу текстарҙың йөкмәткеһен схема формаһында күрһәтеү; таблица, схема йөкмәткеһен текст төрөндә күрһәтеү;

– үҙ тексыңды төҙөгәндә текст, конспект төҙөү нормаларын ҡулланыу;

– үҙеңдең һәм кешенең телмәрен уның коммуникатив талаптарға һәм тел дөрөҫлөгөнә тап килеү күҙлегенән баһалау; телмәр етешһеҙлектәрен төҙәтеү, тексты редакторлау;

– ябай һәм ҡушма һөйләмдәрҙең структур үҙенсәлектәрен һәм башҡорт телендә төрлө коммуникатив төрҙәге һөйләмдәрҙе белеү һәм аңлау;

– яҙма һәм яңғыраған текста, телдән һәм яҙма телмәрҙә ябай һөйләм, һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре, бер составлы һәм ике составлы һөйләмдәр, тиң киҫәкле һөйләмдәрҙе таныу;

– телдән һәм яҙма телмәрҙә тематик йөкмәткеле телмәр сиктәрендә (төп милли байрамдар, ғөрөф-ғәҙәттәр, традициялар) киң ҡулланылышлы тематик фон (фоновой) лексиканы белеү һәм ҡулланыу;

– телмәр үҙ контроленде тормошҡа ашырыу; телдән һәм яҙма сығыштарҙы тел биҙәлеше, ҡуйылған коммуникатив мәсьәләләрҙе өлгәшеүҙең эффектлығы күҙлегенән баһалау;

– баш (эйә менән хәбәр) һәм эйәрсән киҫәктәрҙе (аныҡлаусы, тултырыусы, хәлдәр (ваҡыт, урын, сәбәп, маҡсат, рәүеш, шарт, күләм-дәрәжә, кире) таныу;

– бер составлы һөйләмдәрҙе, уларҙың грамматик билдәләрен; бер составлы һөйләмдәрҙең төрҙәрен (билдәле эйәле һөйләм, билдәһеҙ эйәле һөйләм, эйәһеҙ һөйләм, атама һөйләм) таныу; телмәрҙә бер составлы һөйләмдәрҙе ҡулланыу үҙенсәлектәрен айырыу;

– тиң киҫәкле һөйләмдәрҙе таныу; уларҙы дөрөҫ интонация менән уҡыу; телдән һәм яҙма телмәрҙә ҡулланыу;

– тиң киҫәкле һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре ҡуйылыу нормаларын, дөйөмләштереүсе һүҙҙәре булған тиң киҫәкле һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре ҡуйылыу нормаларын ҡулланыу;

– ҡушма һөйләмдәрҙе таныу һәм уларҙың ябай һөйләмдәр менән айырмалы яҡтарын билдәләү;

– хәҙерге башҡорт әҙәби теленең синтаксик нормаларын;

һүҙбәйләнештәрҙе төҙөү, ябай һәм ҡушма һөйләмдәрҙе төҙөү нормаларын һаҡлау

– хәҙерге әҙәби тел нормаһы күҙлегенән үҙ телмәреңде һәм сит кешенең телмәрен анализлау; телмәрҙе хәҙерге әҙәби телдең төп нормаларына яраҡлы булыуын иҫәпкә алып төҙәтеү;

– социомәҙәни портрет һәм Тыуған илдең, республиканың мәҙәни мираҫы тураһындағы төп белемгә эйә булыу.

## ТЕМАТИЧЕСКОЕ ПЛАНИРОВАНИЕ
## ТЕМАТИК ПЛАНЛАШТЫРЫУ

### 5 КЛАСС (102 СӘҒӘТ)

| Тематик блок, тема | Төп йөкмәтке | Уҡыусыларэшмәкәрлегенең төп төрҙәре |
|---|---|---|
| **Мин һәм минең донъям (57 сәғәт)** | | |
| **Һаумы, мәктәп (12 сәғәт)** | *Һаумы, мәктәп* М. Кәрим «Уҡыусыға», Ғ.Рамазанов «Йәшә, тыуған ерем!». Ф.Ғөбәйҙуллина«Рәйфә мәктәпкә бара», Е.Кучеров «Шүльгәнташ мәмерйәһе», Фонетика. Орфоэпия и Графика. Өн һәм хәреф. Алфавит (ҡабатлау) | Практик эш: мәктәп тураһында ҙур булмаған текст төҙөү, тема буйынса диалогтар, дәреслектән текстар уҡыу, эш дәфтәрендә эш төрҙәрен башҡарыу. Индивидуаль эш: һүҙлектәрҙән кәрәкле һүҙҙәрҙе табыу; Коллектив эш: тексты күсереп яҙыу һәм таныш булмаған һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе, һөйләмдәрҙе билдәләү һәм һүҙҙәрҙе һүҙлекәрҙән табыу |
| | *Минең мәктәбем* А.Игебаев «Һау булығыҙ, аҡҡоштар!», Р. Солтангәрәев «Шағир», С. Алибаев. «Яҡшы», Тартынҡы һәм һуҙынҡы өндәрҙең системаһы. Һуҙынҡы өндәрҙең дөрөҫ әйтелеше (ҡабатлау) | Парҙар менән эш: яңы уҡыу йылына әҙерләнеү, мәктәп тормошо тураһында диалог ҡороу. Индивидуаль эш: тел материалында төҙөлгән текстар уҡыу. Текстарҙы дөрөҫ уҡыу ҡағиҙәләрен һаҡлау һәм дөрөҫ интонация менән уҡыу; һорауҙарға яуап биреү; Практик эш: һүҙҙәрҙе уҡыу һәм һуҙынҡы өндәрҙе дөрөҫ әйтеү |
| | *Минең класташтарым* «Уҡыусылар» (“Башҡортостан уҡытыусыһы” журналынан), Ғ.Ҡотоева «Белем көнө». Тартынҡы өндәрҙең дөрөҫ әйтелеше (ҡабатлау) | Индивидуаль эш: Белем көнө менән ҡотлауҙар яҙыу; үҙаллы уҡыу һәм ҙур булмаған текстарҙы аңлау, һорауҙарға яуап биреү; Практик эш:класташтарының исемдәрен башҡорт телендә алфавит тәртибендә яҙыу; Индивидуаль эш: таныш булмаған һүҙҙәрҙе һүҙлектәрҙән табыу |
| **Үҙем тураһында (12 сәғәт)** | *Мин һәм минең ғаиләм* Ф. Рәхимғолова «Матур менән көслө», Б. Байым “Йәйем”, В.Гудков «Көҙ көнө», Р.Искужина «Минең ҡустыларым», Ә.Хәбибуллина «Беҙҙең | Индивидуаль эш: үҙең тураһында телдән һөйләү: үҙеңдең ғаилә ағзалары һәм туғандарың тураһында һөйләү.. Парҙар менән эш: яңы һүҙҙәр ҡулланып, ҙур булмаған текст төҙөү; Практик эш: һүҙҙәрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе күсереп яҙыу һәм |

| | | |
|---|---|---|
| | ғаилә»<br>Ижек. Ижек төрҙәре (ҡабатлау) | һүҙҙәрҙе ижектәргә бүлеү, юлдан юлға дөрөҫ күсереү |
| | *Үҙем тураһында*<br>Й.Солтанов “Башҡортостан флагы”,<br>Ф.Рәхимғолова “Беҙҙең әсәй”, “Яңы фатир” (“Йәншишмә” гәзитенән).<br>Баҫым. Башҡорт һәм рус телендә баҫымдар (ҡабатлау) | Практик эш: үҙ ғаиләңдең шәжәрәһен төҙөү;<br>Парҙар менән эш: диалогтар төҙөү һәм һүҙҙәрҙә баҫымды дөрөҫ ҡуйыу |
| | *Телмәр үҫтереү*<br>И.Бураҡаев һ.б. «Башҡа халыҡтар шәжәрә яҙғанмы?».<br>«Сыбар тауыҡ» (рус халыҡ әкиәте) | Индивидуаль эш: «Сыбар тауыҡ»әкиәтен уҡыу, һорауҙарға яуап биреү һәм йөкмәткеһен һөйләү;<br>Коллектив эш: И.Бураҡаев һ.б. «Башҡа халыҡтар шәжәрә яҙғанмы?» уҡыу һәм үҙ ғаиләңдең шәжәрәһен төҙөү.<br>Өйрәнелгән лексиканы ҡабатлау |
| **Кеше. Тән ағзалары. Шәхси гигиена (3 сәғәт)** | *Кеше. Тән ағзалары. Шәхси гигиена*<br>И.Ғүмәрова «Уңған ҡыҙ»,<br>А.Кандратова «Һөйләйбеҙ»,<br>Әкиәт «Аҡыллы турғай».<br>Морфемика һәм һүҙьяһалыш. Тамыр һәм аффикс.Һүҙҙең тамыры. Тамырҙаш һүҙҙәр | Шәхси гигиена, көн режимы, сәләмәт тормош алвп барыу тураһында әңгәмә үткәреү.<br>Практик эш: текст уҡыу һәм телдән һөйләү өсөн план төҙөү; Индивидуаль эш: грамматик эш төрө буйынса эшләү (өйрәнелгән кимәлдә) |
| **Яңы йыл менән! (12 сәғәт)** | *Яңы йыл*<br>Г.Юнысова “Ҡыш бабай”, Ф.Иҫәнғолов **«**Алдаҡсы йондоҙҙар**»**, Ҡ.Даян «Шыршы», З.Биишева «Ауырыуҙан ҡотолдо»,<br>Лексикология и фразеология. Фразеологизмдар,уларҙың мәғәнәһе. Ҡулланыу үҙенсәлектәре | Коллектив эш: ҡотлау открыткалары, смс хәбәрҙәр яҙыу.<br>Индивидуаль эш: тел материалы нигеҙендә төҙөлгән текстарҙы дөрөҫ һәм кәрәкле интонация менән ҡысҡырып уҡыу.<br>Парҙарҙа эш: дәреслектәге һүрәттәр буйынса эш төрҙәрен башҡарыу, диалог ҡороу.<br>Практик эш: текст буйынса эш төрҙәрен башҡарыу: тексты уҡыу, һорауҙарға яуап биреү, йөкмәткеһен үҙләштереү |
| | *Беҙҙең елка*<br>А. Исмәғилева «Яуа ҡарҙар...»,<br>М.Ғәли «Беҙҙең елка».<br>Е.Кучеров «Ғинуар».<br>«Карнавал» («Аманат» журналынан)<br>Бер һәм күп мәғәнәле һүҙҙәр | Коллектив эш: текстарҙы уҡыу һәм текст буйынса һорауҙар төҙөү.<br>Индивидуаль эш: грамматик эш төрҙәрен башҡарыу (өйрәнелгән кимәлдә).<br>Практик эш: текстан һүҙҙәрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе күсереп яҙыу һәм бер һәм күп мәғәнәле һүҙҙәрҙе айырыу |
| | *Телмәр үҫтереү* | Индивидуаль эш: картинаны үҙ аллы |

| | | |
|---|---|---|
| | “Ҡышҡы уйындар” сюжетлы картина | ҡарау һәм өйрәнеү.<br>Коллектив эш: картина буйынса тәҡдим ителгән һорауҙар, терәк һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр буйынса һөйләмдәр төҙөү.<br>Индивидуаль эш: картина буйынса ҙур булмаған текст төҙөү.<br>Өйрәнелгән һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәрҙе ҡабатлау |
| **Аҙыҡ-түлек. Кейем-һалым. Өй. Магазин (6 сәғәт)** | *Аҙыҡ-түлек. Кейем-һалым.*<br>Г.Ғәлиева «Икмәк», Ф.Туғыҙбаева «Яңы күлдәк», А.Ягафарова “Бал”<br>Антонимдар. Синонимдар | Коллектив эш: составление текста по теме: “Икмәк –бар нәмәгә баш” темаһы буйынса синоним һәм антонимдар ҡулланып, ҙур булмаған текст төҙөү.<br>Ололарҙың хеҙмәтен хөрмәт итеү буйынса проблемалы һорау ҡуйыу.<br>Тексты укыу, тәржемә һәм ҡыҫҡаса йөкмәткеһен һөйләү.<br>Практик эш: грамматик эш (өйрәнелгән кимәлдә) башҡарыу |
| | *Магазин. Өй*<br>Г.Абдулхаева “Икмәк үткән юл”<br>Р.Шәкүр «Эшһөйәрҙәр иле».<br>Т.Ғәниева “Бишбармаҡ”, А.Гиталов “Икмәк тураһында уйҙар”<br>Омонимдар | Икмәкте һаҡлау һәм игенсе хеҙмәтен, оло кешеләрҙең хеҙмәтен ихтирам итеү тураһында проблемалы һорау ҡуйыу.<br>Индивидуаль эш: Г.Абдулхаева “Икмәк үткән юл” тексын укыу һәм тәржемә итеү.<br>Коллектив эш: Т.Ғәниева “Бишбармаҡ” шиғырын тасуири укыу һәм башҡорт милли аштары темаһы буйынса әңгәмә ойоштороу |
| **8 Март – Ҡатын ҡыҙҙар көнө! (12 сәғәт)** | *Ҡатын-кыҙҙар көнө*<br>Ф.Мөхәмәтйәнова “Әсәйем”<br>М.Пляцковский “Ел белһен...”, Ф.Туғыҙбаева «Тыуған көн», Ғ.Байбурин һүҙҙәре, Р.Сәлмәнов музыкаһы «Яратам мин илемде» (йыр)<br>Морфология.<br>Исем (ҡабатлау). Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр | Коллектив эш: исемдәрҙе ҡулланып, ҡотлау открыткалары һәм смс хәбәрҙәр яҙыу.<br>Парҙарҙа эш: текстарҙы укыу һәм һүҙлектәр ярҙамында тәржемә итеү.<br>Индивидуаль эш: һүҙлектәрҙән таныш булмаған һүҙҙәрҙең тәржемәһен табыу<br>Парҙарҙа эш: яңғыҙлыҡ исемдәр ҡулланып, текстар уйлап яҙыу |
| | *Минең әсәйем*<br>Ә.Ихсан «Әсә рәхмәте», З.Әхмәтйәнова «Нәби менән әбей», З.Ханнанова “Мин бәхетле...”, Ф.Юлдашбаева “Минең өләсәйем”<br>Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше | Индивидуаль эш: Ә.Ихсан «Әсә рәхмәте» тексының төп йөкмәткеһен һөйләү.<br>Парҙарҙа эш: исемдәрҙе килеш менән үҙгәртеү.<br>Практик эш: “Минең әсәйем” тигән темаға әңгәмә ойоштороу |

| Башҡортостан – минең тыуған яғым (12 сәғәт) | | |
|---|---|---|
| **Тыуған Башҡортостаның-ды беләһеңме? (12 сәғәт)** | *Минең Башҡортостаным* С.Әлибаев «Тыуған ерем», “Башҡортостан” (“Аҡбуҙат” журналынан), М.Пришвин «Тәбиғәтте һаҡлаясаҡбыҙ», Ф.Ғөбәйҙуллина «Башҡортостан флагы» Сифат (ҡабатлау). Дөйөм грамматик мәғәнәһе, морфологик үҙенсәлектәре һәм синтаксик функцияһы | Уҡыусыларҙы үҙҙәре йәшәгән республиканың үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге менән танышырыу төп маҡсат булып тора. Республика тураһында улар тулы мәғлүмәтле булырға тейеш. Бының өсөн «Башҡортостан» темаһы буйынса тәҡдим ителгән материалдың тулы һәм тарихи яҡтан дөрөҫ сағылдырыуына иғтибар итергә кәрәк. Парҙарҙа эш: “Башҡортостан – минең тыуған ерем” темаһы буйынса диалогтар ҡороу |
| | *Тәбиғәт менән бергә* М.Ситдикова “Республика көнө”, Ф.Ғөбәйҙуллина “Республиканың дәүләт символдары”, С.Йәнтүриндән «Ҡурай», Р.Латыпова, Р.Камалова “Салауат Юлаев”, С.Юлаев «Уралым», “Ағиҙел йылғаһы” (“Киске Өфө” гәзитенән). Ҡылым (ҡабатлау). Дөйөм грамматик мәғәнәһе, морфологик үҙенсәлектәре һәм синтаксик функцияһы | Практик эш: составление предложений по теме «Минең Башкортостаным» темаһы буйынса сифаттар ҡулланып, һөйләмдәр төҙөү. Проект эше: «Минең тыуған Башҡортостаным»темаһы буйынса проект эше ҡороу Индивидуаль эш: тыуған яҡ тәбиғәте тураһында телдән һөйләү.. Парҙарҙа эш: ҡылымдар ҡулланып, тәҡдим ителгән тема буйынса бәйләнешле текст төҙөү. Төркөмдә эш: тексты уҡыу һәм һорауҙарға яуап биреү. Коллектив эш: «Минең Ватаным»темаһы буйынса проект эше ҡороу |
| | *Телмәр үҫтереү* В.Меос “З.Исмәғилевтың тыуған яҡтары. Сәрмән”. | З.Исмәғилевтың ҡыҫҡаса биографияһы менән танышыу. В.Меос “З.Исмәғилевтың тыуған яҡтары. Сәрмән” картинаһы буйынса план төҙөү. Терәк һүҙҙәр һәм терәк һүҙбәйләнештәр менән танышыу. Картина буйынса бирелгән һорауҙарға ентекле яуап биреү. Картина буйынса бәйләнешле текст төҙөү. Орфография һәм пунктуация ҡағиҙәләрен (өйрәнелгән кимәлдә) һаҡлау |
| **Тыуған яҡтың тәбиғәте (31 сәғәт)** | | |
| **Йыл миҙгелдәре (12с.)** | *Йыл миҙгелдәре* И.Бураҡаев, М. Бураҡаева, М.Юлмөхәмәтов «Беҙ тәбиғәт менән бергә», Г.Скребицкийҙән «Көҙ - рәссам», К. Тәңреколов «Дүрт ҡыҙ», К.Ушинскийҙан «Дүрт теләк», Л.Шаһисолтанов | Коллектив эш: текст уҡыу һәм һорауҙарға яуап биреү. Практик эш: текст уҡыу һәм текстың төп фекерен билдәләй белеү. Парҙарҙа: эйәлек заты алмаштарын ҡулланып, тыуған яҡ тәбиғәте тураһында ҙур булмаған текст төҙөү. Экскурсиялар ойоштороу, тәбиғәтте күҙәтеү, алған тәьҫораттар буйынса |

| | | |
|---|---|---|
| | «Көҙгө урманда», Ф.Рәхимғолова «Ҡайҙан белдең?», С.Муллабаев «Хикмәтле ҡар», Алмаш (ҡабатлау). Зат алмаштары. Эйәлек алмаштары. | әңгәмә үткәреү |
| | *Тәбиғәт күренештәре*<br>М. Дилмөхәмәтов «Яҙ», М. Дилмөхәмәтов «Сәскә менән күбәләк», Л. Толстой «Бабай һәм Һыу инәһе». Л.Шаһисолтанова “Көҙгө урманда”, С.Әлибаев “Матур көн”<br>Билдәһеҙлек алмаштары | Коллектив эш: тыуған яҡ тәбиғәтен, һауа торошон, йыл миҙгелдәрен һүрәтләү.<br>Парҙарҙа эш: йортхайуандары, ҡырағай хайуандар, йылы яҡҡа осоусы ҡоштар, йорт ҡоштары тураһында диалог ҡороу.<br>Тәбиғәтте һаҡлау тураһында проблемалы һорау ҡуйыу.<br>Практик эш: йылы миҙгеле тураһында, тәбиғәт тураһында күрһәтеү, билдәһеҙлек алмаштары ҡулланып, текст төҙөү |
| **Яҙ етте**<br>**(14 сәғәт)** | *Яҙ*<br>Ә.Ихсан «Яҙ»,<br>С. Муллабаев «Олатай», В.Осеева «Әбей»,<br>Р.Ғарипов “Сыйырсыҡ”, Ф.Ғөбәйҙуллина «Минең дуҫым компьютер», М.Дилмөхәмәтов «Яҙ».<br>Күрһәтеү алмаштары | Тәбиғәтте күҙәтеү, алған тәьҫораттар буйынса дискуссиялар үткәреү. Яҙ көнө үткәрелгән милли байрамдар тураһында әңгәмә ҡороу.<br>Коллектив эш: Р.Ғариповтың биографияһы менән танышыу һәм «Сыйырсыҡ» шиғырын тасуири уҡыу.<br>Парҙарҙа эш: күрһәтеү алмаштары ҡулланып, диалог төҙөү |
| | *Ҡоштар –беҙҙең дуҫтарыбыҙ*<br>Е. Кучеров «Ҡоштар ҡасан ҡайта?»,<br>Ф.Рәхимғолова «Еңеү көнө», В.Исхаҡов «Миҙал һәм малай», С. Богомазов «Беҙгә тыныслыҡ кәрәк», К.Ушинский «Баҡсасы һәм уның улдары», Н. Надеждина «Яҙҙың тәүге сәскәһе»,<br>А.Асадуллина “Өмәлә”.<br>Һорау алмаштары<br>Билдәләү алмаштары | Коллектив эш: «Ҡоштар – беҙҙең дуҫтарыбыҙ» темаһы буйынса проект эше ҡороу.<br>Парҙарҙа эш: һорау алмаштары ҡулланып, диалог төҙөү |
| | *Телмәр үҫтереү*<br>Р.Нурмөхәмәтов «Эштән һуң» (картина) | Р.Нурмөхәмәтов «Эштән һуң» (картина) буйынса инша яҙырға әҙерләнеү.<br>Картина буйынса бирелгән һорауҙарға ентекле яуап биреү. Картина буйынса бәйләнешле текст төҙөү.<br>Орфография һәм пунктуация ҡағиҙәләрен (өйрәнелгән кимәлдә) һаҡлау |

| | | |
|---|---|---|
| **Йәйҙе ҡаршылайбыҙ (5сәғәт)** | *Һаумы, йәй!*<br>С.Әлибаев «Һаумы, йәй!»,<br>Ә.Чаныш. «Ҡоштоң ғүмере – йырында»,<br>“Ҡарға буҫкаһы”,<br>“Һабантуй” (“Аҡбуҙат” журналынан”<br>Юҡлыҡ алмаштары | Чтение текстов и беседа о летнем отдыхе детей, труде, помощи взрослым.Уҡыусыларҙың йәйге ялы, хеҙмәте, ололарға ярҙам итеүҙәре тураһында әңгәмә үткәреү.<br>Парҙарҙа эш: юҡлыҡ алмаштары ҡулланып, үҙ фекереңде әйтеү |
| | *Тыуған ер!*<br>А.Игебаев «Тыуған ер».<br>“Лагерь иртәһе” (“Аманат” журналынан”)<br>Алмаш (ҡабатлау) | Уҡыусылар менән кеше тормошонда хеҙмәттең роле тураһында әңгәмә үткәреү.<br>Парҙарҙа эш: юҡлыҡ алмаштары ҡулланып, диалогтар төҙөү |
| **Уҡыусыларҙың белемдәрен тикшереү һәм үтелгәндәрҙе ҡабатлау (2 сәғәт)** | | Үтелгән материалдарҙы ҡабатлау, контроль эш яҙҙырыу, алынған белемдәрен коррекциялау буйынса эштәр башҡарыу |
| **102 сәғәт** | | |

## 6 КЛАСС (102 СӘҒӘТ)

| Тематик блок, тема | Төп йөкмәтке | Уҡыусыларэшмәкәрлегенең төп төрҙәре |
|---|---|---|
| | **Мин һәм минең донъям (32 сәғәт)** | |
| **Беҙҙең мәктәп (16 сәғәт)** | *Беҙҙең класс һәм минең дуҫтарым*<br>Т.Ғәниева «Беренсе сентябрь», «Намыҫлы бул» («Көс һәм рух тамырҙары» китабынан),Ф.Фәткуллина «Ҡояш»,<br>“Сыйырсыҡ” (“Мәктәп календары”нан)<br>Һан. Ябай һәм ҡушма һандар. | Индивидуаль эш: текстың йөкмәткеһен һөйләргә өйрәнеү. Коллектив эш: Т.Ғәниева «Беренсе сентябрь» шиғырын тасуири укыу, “Белем көнө” темаһына әңгәмә ойоштороу. «Намыҫлы бул» («Көс һәм рух тамырҙары» китабынан)текстан таныш булмаған һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр яҙып алыу һәм уларҙың тәржемәһен һүҙлектәрҙән табыу. Парҙар менән эш: һандар ҡулланып, диалог төҙөү. |
| | *Көҙ күренештәре*<br>С.Аксаков «Аҡҡош»,<br>Г.Яҡупова “Октябрь”,<br>Р.Низамов “Көҙ картинаһы”<br>К.Кинйәбулатова «Көҙҙәр еткәс» М.Горький «Китапты яратығыҙ!».<br>Ябай һәм ҡушма һандар | Коллектив эш: дәреслек буйынса эш төрҙәрен башҡарыу.<br>Практик эш: дәреслектә бирелгән текстарҙан һандарҙы табыу, ябай һәм ҡушма һандарҙы айырыу |
| **Дуҫлыҡ ҡәҙерен бел! (16 сәғәт)** | *Дуҫлыҡ*<br>Р. Бикбаев «Дуҫлыҡ ауыр саҡта һанала «, «Һеҙҙе ҡунаҡҡа саҡырҙылар... («Ҡыҙҙарға мең кәңәш» китабынан).<br>Һан төркөмсәләре: төп һандар | Индивидуаль эш: телмәр этикетын һаҡлап, дуҫыңа шәхси смс хәбәр яҙыу.<br>Практик эш: «Һеҙҙе ҡунаҡҡа саҡырҙылар... « («Ҡыҙҙарға мең кәңәш» китабынан) тексын укыу һәм һандарҙы табып, төркөмсәләрен (өйрәнелгән кимәлдә) билдәләү. |

| | | |
|---|---|---|
| | | Беседа үткәреү: «Халыҡтар дуςлығы – Рәсәй берҙәмлеге».<br>Орфография һәм пунктуация (өйрәнелгән кимәлдә) ҡағиҙәләрен һаҡлау |
| | *Минең дуςтарым*<br>Д. Фатихова «Кем дуς?», А.Йәғәфәрова «Дуςлыҡ менән шаярмайҙар». Г.Юнысова «Башкортостан –дуςлыҡ иле».<br>Рәт һандары | Кешеләр араһындағы дуςлыҡ, ысын дуςлыҡтың мөһим мәғәнәһе тураһында әңгәмә үткәреү.<br>Практик эш: Һандар ҡулланып, үҙегеҙ тураһында һөйләү.<br>Парҙарҙарҙа эш: рәт һандары ҡулланып, диалог төҙөү |
| | *Телмәр үςтереү*<br>О.Багаевская "Ҡунаҡтар (Тыуған көн") (картина) | Индивидуаль эш: картинаны үҙ аллы өйрәнеү.<br>Коллектив эш: һүҙлек эше, һорауҙар ярҙамында картина буйынса һөйләмдәр төҙөү.<br>Практик эш: ҙур булмаған текст төҙөү.<br>Өйрәнелгән лексиканы һәм грамматиканы ҡабатлау.<br>Яҙыуҙа орфография һәм пунктуация ҡағиҙәләрен ҡулланыу |
| **Башҡортостан – минең тыуған яғым (17 сәғәт)** | | |
| **Башҡортостан ере буйлап<br>(17 сәғәт)** | *Минең Ватаным*<br>А. Филиппов «Ватан»,<br>Ф. Мөхәмәтйәнов «Кешем – ил күрке». Р. Бикбаев «Салауат батыр һәйкәле»,<br>В. Дмитриев «Ҡайын».<br>Йыйыу һандары | Парҙарҙа эш: йыйыу һандары ҡулланып, диалог төҙөү.<br>Индивидуаль эш: В. Дмитриев «Ҡайын» тексын уҡыу һәм уның структур үҙенсәлектәрен билдәләү. Уҡылған текст буйынса план төҙәй белеү |
| | *Минең Башкортостаным*<br>А. Ахметова «Ҡайындар ниңә аҡ (әкиәт) З.Ураҡсин «Яраҡлашыу», Р.Ураҡсина "Башҡортостан",<br>М. Карим «Ватаным «.<br>Бүлем һәм сама һандары | Парҙарҙарҙа эш: бүлем һәм сама һандары ҡулланып, диалог төҙөү. Индивидуаль эш: тыңланған текстың төп йөкмәткеһен һөйләү һәм һорауҙарға яуап биреү.<br>Парҙарҙарҙа эш: «Минең Башкортостаным!» темаһы буйынса проект эше ҡороу |
| | *Үҙ тыуған яғығыҙҙы яратығыҙ!*<br>С. Юлаев «Тыуған илем», Г. Молодцов «Башкирия»,<br>Ф. Туғыҙбаева «Кем уңған?», М. Карим «Дим буйы», В. Сухомлинский «Сөнки мин - кеше», Ғ.Хөсәинов. «Оло яҙыусы һәм ғалим», Ә. Әсәдуллина «Хушлашыу».<br>Кәсер һандары | Коллектив эш: кәсер һандары ҡулланып, ҙур булмаған хәбәр еткереү. Практик эш: текстың өлөштәрен билдәләү буйынса эш: текстың баш өлөшө, төп өлөш, тамамланыу өлөшө. Индивидуаль эш: коммуникатив мәсьәләне хәл итеү йәһәтенән текстарҙан һүҙ һәм һүҙбәйләнештәрҙе яҙып алыу; уҡылған текстың планын төҙөү |
| | *Телмәр үςтереү*<br>В.Меос "Тауҙарҙа томан. Белорет районы" (картина) | В.Меостың ижады менән танышыу, уның картиналарын тςкә төшөрөү.<br>Коллектив эш: картина буйынса әңгәмә |

| | | |
|---|---|---|
| | | ойоштороу.<br>Практик эш: Һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр яҙыу һәм һөйләмдәр төҙөү |
| **Тыуған яктың тәбиғәте (51 сәғәт)** | | |
| **Ҡыш дауам итә (16 сәғәт)** | *Ап-ак кыш*<br>Ф.Мәҡсүтова «Ҡар бөртөктәре», И.Ф. Зиянчковскийҙан «Ҡышҡы тәбиғәт», «Ҡоштар донъяһы» («Башҡортостан» газетаһынан), Г.Яҡупова «Уртаҡ ҡыш», Рәүештәрҙең дөйөм грамматик билдәләре. Рәүеш төркөмсәләре. Төп рәүеш. Сәбәп-маҡсат рәүеше | Коллектив эш: тәбиғәтте күҙәтеү һәм ҡыш үҙенсәлектәрен билдәләү.<br>Алған тәьҫораттар буйынса әңгәмә. Парҙар менән эш: сәбәп-маҡсат рәүештәре ҡулланып, диалогтар төҙөү.<br>Индивидуаль эш: өлгө, план, терәк һүҙҙәр, һүрәттр ҡулланып, “Ҡыш етте” темаһы буйынса ҙур булмаған сығыш әҙерләү |
| | *Ҡар яуа*<br>К.Шафиҡова «Ҡар яуа», Х. Ғиляжев «Оса күктә», Т.Сәғитов «Икмәк»,<br>Ә. Бикташев «Хыял»,<br>К. Чарушин «Ҡыш етте», И. Киньябулатов «Хәйерле иртә, донъя!»,<br>К. Киньябулатова «Аҡ нур булып балҡыны». Н. Наджми «Ҡыш»,<br>Ваҡыт рәүеше. Урын рәүеше. | Ҡыш миҙгелендә үтә торған милли халыҡ байрамдары менән таныштырыу. Проблемалы һорау: тәбиғәтте һаҡлау һәм ҡыш көндәрендә ҡышлаусы ҡоштарға ярҙам итеү.<br>Парҙар менән эш: ваҡыт һәм урын рәүештәре ҡулланып, диалог төҙөү |
| | *Телмәр үҫтереү*<br>И.И.Шишикин «Ҡарағай урманындағы иртә» (картина) | Һүҙлек эше.<br>Коллектив эш:картина буйынса тәҡдим ителгән һорауҙар, терәк һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр буйынса һөйләмдәр төҙөү.<br>Индивидуаль эш: картина буйынса ҙур булмаған текст төҙөү.<br>Өйрәнелгән һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәрҙе ҡабатлау. |
| **Яҙ килә, яҙ!**<br>**(17 сәғәт)** | *Яраткан миҙгелем*<br>Р.Янбулатова «Ҡоштар ҡайта», Ҡ.Кулиев «Бөтә тереклекте һаҡлағыҙ», Г.Юнысова «Тәбиғәтте шулай яраталармы?», Р.Ҡужина-Латыпова «Күҙҙәрендә әсәй – донъя…», К.Кинйәбулатова «Ҡарғалар йыры»<br>Күләм-дәрәжә рәүештәре<br>Сағыштырыу рәүештәре | Яҙ миҙгеленең үҙенсәлектәре тураһында әңгәмә үткәреү.<br>Практик эш: Г.Юнысова «Тәбиғәтте шулай яраталармы?» тексын уҡыу һәм текст буйынса әңгәмә үткәреү.<br>Коллектив эш: үҙләштерелгән яңы һүҙҙәрҙе, күләм-дәрәжә, сағыштырыу рәүештәре ҡулланып, һөйләмдәр төҙөү |
| | *Халыҡ йолалары*<br>Р. Солтангәрәева «Ҡарға бутҡаһы», З.Биишева «Баҡсала», Ф.Рәхимғолова «Апрель йылмая», Я. Колас «Яҙ | Яҙ айҙарында үтә торған милли халыҡ йолалары менән таныштырыу. Яҙғы тәбиғәткә экскурсиялар ойоштороу, сәскә, шифалы үләндәр исемлектәре менән таныштырыу. |

| | | |
|---|---|---|
| | тураһында йыр»,<br>Ә. Саяпова «Еңеү көнө», С. Әлибаев «Беҙ һанайбыҙ һандарҙы»,<br>Н. Виноградованан «Урманда йөрөү ҡағыҙәләре»<br>Сәбәп-маҡсат рәүештәре | Индивидуаль эш: сәбәп-маҡсат рәүештәре ҡулланып, диалог ҡороу.<br>Дәреслектә бирелгән текстар буйынса эш төрҙәрен башҡарыу.<br>Практик эш: Б.Домашников. «Май. Ҡайынлыҡ» картинаһы буйынса терәк һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәргә таянып, һөйләмдәр уйлау һәм бәйләнешле текст уйлап яҙыу |
| | *Телмәр үҫтереү*<br>Б.Домашников. «Май. Ҡайынлыҡ» (картина), | Рәссамдың ижады менән танышыу. Б.Домашников. «Май. Ҡайынлыҡ» картинаһының исеменә иғтибар итеү һәм уҡыусыларҙың фекерҙәрен тыңлау. Белешмә өсөн бирелгән һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр ҡулланып, һөйләмдәр төҙөү. План буйынса һөйләргә өйрәнеү. |
| **Йәмле йәй килә (18 сәғәт)** | *Йәйҙе яратам!*<br>Г.Фәйзи «Йәйҙе яратам», С.Хәжиев “Июнь”, Р.Әхмәҙиев «Июнь һәм май», Ш.Янбаев «Һабантуй», Р.Ғабдрахманов. «Ил төкөрһә, күл була», Р.Ғамзатов «Әсә йыры»,», М.Сиражи<br>«Йәй», В.Ғүмәров “Тәбиғәт шифаханалары”.<br>Рәүештәрҙең сағыштырыу һәм артыҡлыҡ дәрәжәләре. | Тема буйынса уҡыусыларҙың йәйге ялын ойоштороу, уны нисек файҙалы итеп үткәреү тураһында әңгәмәләр ойоштороу. Йәй миҙгеленең үҙенсәлектәрен билдәләү, йәй көндәрендәге хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре менән танышыу. Сәскәләр, шифалы үләндәр, ағастар атмалары менән таныштырыу, уларҙы танырға өйрәтеү.<br>Парҙарҙа эш: рәүештәрҙең сағыштырыу һәм артыҡлыҡ дәрәжәләрен ҡулланып, “Йәйге тәбиғәт” темаһына ҡыҫҡа текст төҙөп яҙыу |
| | *Йәмле йәй*<br>Г.Яҡупова “Июль”, “Сәскәләрҙән сәскәләргә ҡуныпп..." ("Мәктәп календары"нан), "Балан" ("Йәшлек" гәзитенән), А.Ферсман "Күҙәтергә өйрән", С.Йәһүҙин "Ҡурай", С.Әлибай “Сал Урал”Й.Солтанов “Тыуған еркәйем”.<br>Рәүеш (нығытыу) | Балаларҙыңйәйге ялы, хеҙмәт, ололарға ярҙам итеү тураһында текстар уҡыу һәм әңгәмәләр үткәреү. Үҙләштергән яңы һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәрҙе ҡулланып, һорауҙарға яуап биреү.<br>Индивидуаль эш: Р.Ғамзатовтың «Әсә йыры» тексын уҡыу, һүҙлек эше үткәреү, һәм төп мәғәнәһен аңлау, текст буйынса һорауҙар төҙөү.<br>Парҙарҙа эш: рәүештәрҙе ҡулланып, диалог төҙөү |
